✓ ***Мөхтәрәм йәмәғәт! Кемдәр быйылғы йылдың икенсе ярты йыллығына "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгән, августың 17-һенә тиклем яҙылһағыҙ, гәзитте киләһе айҙан алдыра башлаясаҡһығыҙ. 31 августа тиклем 2012 йылдың беренсе ярты йыллығы өсөн быйылғы хаҡтар менән (50665 индекслыһына 340 һум 92 тин, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) 370 һум 92 тин) ваҡытынан алда матбуғат баҫмаларына яҙылыу бара, тигән иғланыбыҙҙы ла иҫкә алып ҡуйығыҙ.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6 - 12 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№32 (450)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Айыҡ көйө лә...** йырлап-бейеп була — 5





**Ниңә "Монблан",** ә Ирәмәл түгел? — 6






**XXI быуат Бабичын көтәбеҙ...** урыҫтар Пушкинын көткән кеүек — 8-9





**Аҡ нурҙарға үрелеп күтәрелдем,** Күңелемә тулды йырҙарым — 10





14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Беҙҙең башҡорттарҙа шәжәрәнде, үҙеңдең ырыу-ара тарихыңды өйрәнеү менән ҡыҙыҡһыныу көсәйә бар. Был беҙгә нимә бирә?

***Рудоль ӘУСӘХОВ, архитектор, Рәсәй Архитекторҙар академияһы кәңәшсеһе, Илеш районы башҡорто:*** Шәжәрәнде белеү - ул тарихыңды таныу, үҙеңдең кешелек асылыңды төшөнөү, донъялыҡта йәшәү мәғәнәһен аңлау, тип иҫәпләйем. Теләйбеҙме, юҡмы, кешелек ностратик дәүерҙәге берҙәмлеккә кире ҡайта бара кеүек. Был күренеште сәйәсмәндәр интеграция, глобалләшеү тип атай. Шул уҡ ваҡытта Ер шарындағы һәр бер милләт үҙ аллы милләт, ойошма булып йәшәргә теләй: украиндың - урыҫ, урыҫтың - украин, чечендың - ингуш, ингуштың - чечен, башҡорттоң - татар, татарҙың башҡорт булғыһы килмәй.

**Милләттәрҙе яһалма рәүештә берләштереүҙең совет осоронда нимәгә алып килеүен күрҙек, һөҙөмтәлә Ер шарының иң ҡеүәтле дәүләте тарҡалды. Ошондай хәл тағы ҡабатланмаһын өсөн беҙгә үҙ тамырҙарыбыҙҙы, үҙебеҙҙең кем икәнебеҙҙе белергә, тарихыбыҙҙы өйрәнергә кәрәк, сөнки Рәсәй үҙендә йәшәгән күп һанлы милләт халыҡтары менән генә берҙәм һәм көслө була ала. Бына ни өсөн кәрәк беҙгә шәжәрәләребеҙҙе төҙөү, уны өйрәнеү, ырыу-арабыҙҙы таныу.**

Эҙләп тапҡан барлыҡ архив материалдарында минең ата-бабаларым хаҡында "аҫаба, ерле башҡорт" тип яҙылған. Беҙҙең Илеш төбәгендә йәшәгәндәрҙең күбеһе үҙ тамырҙарын юллап, шәжәрәләрен төҙөп, атай-олатайҙарының башҡорт булыуын белде.

***Һөйөндөк АҪЫЛОВ, журналист:*** Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа үҙ нәҫел-нәсәбеңдең килеп сығышын өйрәнеп, шул нигеҙҙә нәҫел шәжәрәләрен төҙөү эшмәкәрлеге киң ҡолас алды. Был изге ынтылыш йәшәйешебеҙҙең тарихи сылбырын ялғап, үҙ ата-бабаларының бөгөнгө вариҫтары булған милләттәштәребеҙҙең милли үҙаңын яңыртып, быуындар араһындағы күсәгилешлекте киләсәккә йүнәлтеү мөмкинлеген аса. Шулай итеп, халҡыбыҙҙың үҙ туған телен, милләт, ырыу һәм нәҫел тарихын системалы өйрәнә алыуы башҡорт халҡының берҙәмлеген һәм бөтөнлөгөн тәьмин итеүсе төп фактор булып тора. Әлбиттә, шәжәрәне, халҡыбыҙ тарихын, ырыу-ара тамырҙарҙы барлау эшенә ҡараш төрлөсә булды. Мәрхүм яҙыусыбыҙ Булат ағай Рафиков иҫән сағында башлап ебәргән ырыуҙар хәрәкәте ҡайһы бер ғалимдар тарафынан кире тарихҡа ҡайтыу - трайболизм тип тә баһаланды. Әлеге мәлдә лә, хатта ки "Шәжәрә байрамдары" Хөкүмәт кимәлендәге ҡарар нигеҙендә тормошҡа ашырылып килгән һәм мөһим тәрбиәүи сара буларак танылыу алған көндәрҙә лә быны кәрәклеген шик аҫтына алыу, уны архаизмға бирелеү тип баһалаған фекерҙәр ишетелгеләй. Бындай мөнәсәбәткә яуап шундай булырға тейештер, тием: тарихыбыҙҙы белеү, ырыу-ара шәжәрәбеҙҙе өйрәнеү беҙгә милләтебеҙ асылына тоғролоҡ һәм ихтирамлыҡ тойғоһон һаҡлау өсөн, илебеҙҙең ҡеүәтле һәм бер бөтөн булып йәшәүе өсөн кәрәк. Бөтөн ил буйынса яҙып ҡуйылған "Рәсәй региондар менән көслө" тигән ҡанатлы һүҙҙәр бөтәбеҙгә лә яҡшы мәғлүм. Был, тимәк, Башҡортостаныбыҙҙы бар иткән башҡорт ырыуҙарының көслө, берҙәм булыуы




һуңғы сиктә Рәсәй дәүләтселегенең дә көслө булыуында мөһим роль уйнай тигән һүҙ. Йәғни быны баҫҡыслап һанау механизмы түбәндәгесә була: ғаилә - уның ағзалары, аралар - ғаиләләр, ырыуҙар - аралар, милләт - ырыуҙар, дәүләт милләттәре менән көслө. Хәҙерге милләттәштәребеҙҙе милләтебеҙҙең атамаһы берләштерә, әммә артабанғы бүленештәге "ырыуҙаштар", "аралаштар", "туғандар", "бер ғаилә ағзалары" тигән төшөнсәләр бер-береһенән алыҫлаштыра барған кеүек. Былар барыһы ла элек-электән йәшәп килгән, изге һаналған ырыу, зат, туғанлыҡ институттарының тарҡалыуынан килә. Бер туғандарҙың бер-береһенән алыҫлашыуын, ҡунаҡҡа йөрөшмәүе, хатта ҡайһы осраҡта һуңғы юлға оҙатышырға килмәүе ошо кире күренештең һөҙөмтәһе. Ырыу-араңды белеү, таныу, өйрәнеү, шәжәрәнде төҙөү - ул үҙмаҡсат йәки иҫкелек ҡалдығы түгел, ә иң беренсе - кеше булып йәшәү өсөн кәрәк беҙгә.

**Икенсенән, дәүләттең милләттәрҙе һаҡлау механизмы юҡлығы фактын да таныҙға кәрәк. Шуға күрә лә милләттең үҙ-үҙен һаҡлау инстинкты ла сағылалыр тарихҡа ҡайтыу күренешендә.**

Боронғоһон белгән, үткәне менән ғорурланған халыҡты берәү ҙә еңә алмай. Беҙҙең көс - тамырҙарыбыҙҙа.

***Рифмир ГӘРӘЕВ, библиограф, крайҙы өйрәнеүсе. Йәрмәкәй районы башҡорто:*** Шәжәрәһен, тыуған тамырҙарын белеү, өйрәнеү үҙ-үҙен ихтирам иткән, үҙен йүнле кеше тип иҫәпләгән һәр кемдең изге бурысы тип һанайым. Ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған васыят та бар - ете быуыныңды белеү фарыз, тигән улар. Мин үҙем, мәҫәлән, утыҙ йыллап инде шәжәрәм, тыуған ауылым - Исламбаҡты (Йәрмәкәй районы) тарихы һәм уның кешеләре тураһында эҙләнеүҙәр алып барам. Беҙҙең Йәрмәкәй районы территорияһында боронғо байлар, ҡыр-йылан ырыуы башҡорттары вариҫтары йәшәй. Ваҡытында оло йәштәге кешеләрҙән ауылым, яҡташтарым тураһында мәғлүмәттәрҙе бөртөкләп йыйҙым. Был өлкәлә миңә 45 йыл буйы З. Вәлиди исемендәге Республика милли китапханаһында эшләүем дә булышлыҡ итте. Архив документтарын өйрәндем, элек сығып килгән ваҡытлы матбуғат баҫмалары биттәрен аҡтарҙым. Ошондай эҙләнеүҙәрем һөҙөмтәһендә "Исламбаҡты - тыуған төйәгем" тигән китабым баҫылып сыҡты. Унда арҙаҡлы ауылдашым - бәләкәйҙән ғаиләһе менән Үзбәкстанға барып төпләнгән һәм билдәле рус телле яҙыусы булып киткән ҡәрҙәшем Йәүҙәт Ильясов хаҡында ла ҡиммәтле мәғлүмәттәр бар.

Үҙемдең ырыу шәжәрәһен төҙөп алдым. Уны ауылдаштарыма алып ҡайтып күрһәткәйнем, бик шатландылар, ҙур ҡыҙыҡһыныу менән өйрәнделәр уны. Ошоға бәйле бер фәһемле хәл иҫемә төшә. Бер ауылдашым шәжәрәгә оҙаҡ ҡарап торғандан һуң: "Ай Алла, бынауы Н. менән кисә нык ҡына әрләшеп киткәйнек, ул минең туған тейеш кешем булып сыҡты ла баһа!" - тип оялғайны хатта. Бына бит, шәжәрәбеҙҙе, башҡорт милләтенән икәнебеҙҙе белмәй, хатта туған туғанды һанламай һуҡырҙарса йәшәр инек әле шулай. Беҙ бит кешеләр, киләсәк быуындарҙың хәтер сылбыры өҙөлмәҫлек булһын өсөн дә үҙ шәжәрәбеҙҙе белергә бурыслыбыҙ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

**Ошо көндәрҙә Республика йортонда Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республиканың киң мәғлүмәт саралары, шулай уҡ федераль баҫмалар һәм агентлыҡтарҙың төбәк вәкиллектәре баш мөхәррирҙәре менән осрашты.**

# МӘҒЛҮМӘТТЕҢ ҠАЙҺЫҺЫ ЯҠШЫ?

## Күҙмә-күҙ ҡарап һөйләшкәндәгеһе инде...



Президент тәүҙә үк власть органдарының киң мәғлүмәт саралары менән үҙ-ара хеҙмәттәшлеге темаһына ҡағылып үтте һәм журналистарҙың күп йәһәттән дәүләт эштәренә йүнәлеш биреүсе, ғәмәлдәге тәжрибәләргә йоғонто яһаусы, уларҙы үҙгәртеүсе йәки дауам итеүсе кешеләр булыуын билдәләне. "Ә шулай ҙа ошо бер йыл эсендә киң мәғлүмәт саралары Президент эшенә ярҙам иттеме, әллә ҡамасауланемы?" тигән һорауға ла Рөстәм Зәки улы ынғай яуап бирҙе. Әммә матбуғат сараларының потенциалы байтаҡҡа ҙур булып та, уның тулыһынса тормошҡа ашырылмауын, журналистарҙың йәшәйештең бөтөн тармаҡтарына ла үтеп инергә ҡыйыулығы етеңкерәмәүен дә әйтеп үтте. "Донъя төрлө мөғжизәләр һәм геройҙарҙы ярата бит" тип кинәйәле генә әйтеп ҡуйыуынан шул аңлашылды: мөғжизәләр тураһында яҙыу ҙа кәрәктер, әммә журналистарға күберәк халыҡ тормошондағы проблемаларҙы яҡтыртырға, уларҙы хәл итеү юлдарын анализларға кәрәк. Ә беҙҙең баҫмаларҙа аналитика етешмәй...

Рөстәм Хәмитов киң мәғлүмәт саралары алдында торған тағы бер бурыс хаҡында иҫкә төшөрөп китте:

- Беҙҙең алда декабрь айында башланасаҡ оҙайлы һайлау алды һәм һайлау осоро тора. Әле Дәүләт Думаһына һайлау алды кампанияһы старт алды, 2012 йылдың март айында - Рәсәй Федерацияһы Президенты һайлауҙары, Өфө ҡала Советына һайлауҙар, 2013 йылдың март айында республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға һайлауҙар буласаҡ. Был йәмғиәттә үҙ-ара мөнәсәбәттәр киҫкенләшкән ауыр осор. Һәм был ғәҙел, аңлайышлы күренеш. Әлбиттә, мөмкин булмаһа ла, беҙ был ваҡыт арауығын мөмкин тиклем ҙур тетрәнеүҙәрһеҙ, бәрелештәрһеҙ, ауырлыҡтарһыҙ үткәрергә тейешбеҙ. Үҙ-ара бәрелештәр ҙә буласаҡ, осҡондар ҙа сәсрәйәсәк. Былар барыһы ла аңлашыла. Ләкин был йәмғиәтебеҙ нигеҙен ҡаҡшатырға тейеш түгел. Был эштә мин киң мәғлүмәт сараларына ҙур әһәмиәт бирәм, - тине республика Президенты.

Артабан Рөстәм Зәки улы Президент булып бер йыл эшләү осоронда үҙе өсөн яһаған ҡайһы бер һығымталары менән бүлеште:

- Президент, минең аңлауымса, аҡса һәм байлыҡ таратыусы түгел, ә йәмғиәттә әхлаҡи мөхит булдырыусы кеше, - тине ул. - Ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы тороусы, етешһеҙлектәр менән көрәшеүсе кеше. Мин эшемдә ошо позицияларҙан сығып башҡарырға тырышам...

- Беҙҙең ярайһы уҡ ҡаты системала эш итеүебеҙҙе аңлайым, был беҙгә оҡшамаһа ла, уны ҡәтғи рәүештә төҙәтә алмайбыҙ, - тип дауам итте Президент идара итеү системаһындағы ҡайһы бер проблемаларға, шулай уҡ Федераль үҙәк менән мөнәсәбәттәргә ҡағылып. - Беҙ был хаҡта әйтә генә алабыҙ һәм системалағы кәмселектәрҙе төҙәтеү йәһәтенән һөйләшеп килешеүгә процестарына булышлыҡ итә алабыҙ. Кәмселектәр бар, әлбиттә. Һуңғы ярты йыллыҡта, Рәсәй Федерацияһы Дәүләт советы Президиумы составында эшләп, дәүләт етәкселәренә, Рәсәй Президентына шундай үйҙарҙы еткерергә тырыштым: беҙҙең бөйөк илдәге федераль мөнәсәбәттәр яңынан ҡарап сығыуҙы талап итә. Федерация субъекттары һәм Федераль үҙәк араһында вәкәләтлек хоҡуҡтарын бүлеү заруур. Субъекттарға, муниципалитеттарға хоҡуҡтарҙы күберәк бирергә кәрәк. Беҙҙә ишеттеләр, тип уйлайым. Һәр хәлдә, бөгөн был темаларҙы анализлаясаҡ эш төркөмдәре төҙөү, уларҙың эш итеү алымдары нисек булырға тейешлеге тураһындағы мәсьәләләр ҡарала. Бының менән әйтергә теләгәнем шул: бөгөн беҙ ҡатыраҡ шартларҙа эшләнәк тә, сиктәрҙе киңәйтергә, федераль үҙәк менән килешеп эш итергә йәки уға йоғонто яһарға тырышырға тейешбеҙ. Республика Президенты булараҡ үҙемдең бурысымды ошонда ла күрәм: республикабыҙҙың үҙенең мөмкинлектәрен һәм эш итеү даирәһен киңәйтеү...

Баш мөхәррирҙәрҙең һорауҙарына яуап биреп, Президент һуңғы йылдарҙа Башҡортостан Республикаһының дөйөм Рәсәйҙәге үҫеш тенденцияһынан, тормош сифаты буйынса ла, сағыштырма күрһәткестәр буйынса ла артта ҡала барыуы тураһында һөйләне. Буласаҡ һайлауҙар ваҡытында көтөлгән ваҡиғаларға үҙ мөнәсәбәтен белдерҙе. Ғөмүмән, асыҡтан-асыҡ һөйләшеү, фекерҙәр менән ихлас уртаҡлашыу килеп сыҡты. Журналист өсөн ошондай күҙмә-күҙ ҡарашып, иң юғары кимәлдәге етәкселәрҙән, белгестәрҙән, профессионалдарҙан ысын һәм теүәл мәғлүмәт алыуҙан да яҡшыһы юҡ. Был йәһәттән, әлбиттә, Рөстәм Зәки улы Президент эшмәкәрлегенең башында уҡ башҡаларға өлгө күрһәтте: уның интернеттағы блогында ниндәй генә темалар күтәрелмәй! Президент уларға үҙ мөнәсәбәтен, үҙ яуабын биреп барырға тырыша. Әлбиттә, тәүге мәлдә блогта негатив хәбәрҙәр өҫтөнлөк итә ине. Хәҙер халыҡ негативтан ҡотола бара, ялыуҙарҙы, кемдеңдер яманатын һатыуҙы эшлекле тәҡдимдәр, алдынғы тәжрибә менән уртаҡлашыу алыштыра.

"Ҙур проблемалар юҡ, ләкин хәл итә торған мәсьәләләр бар", - тине осрашыу һуңында республика Президенты. Ошонда Президент мин үҙем осрашыу барышы буйы, баш мөхәррирҙәрҙең кеме күтәрер икән, тип көткән бер һорауҙы ҡуҙғатып ҡуйҙы. Үҙәк баҫмалар журналистарының Башҡортостан Республикаһы Президентына бирә торған иң яратҡан һорауын беләһегеҙ: "Мәктәптәрҙә артабан да дәүләт теле булараҡ башҡорт теле уҡытыласаҡмы?" Рөстәм Зәки улы инде улар был һорауҙы ҡабат бирмәслек итеп ҡәтғи яуап та ҡайтарҙы ҡайтарыуға: "Башҡорт теле уҡытыласаҡ. Уны уҡыта торған башҡа республика юҡ!" Әммә был һорауҙы федераль баҫмалар журналистары онотоп ҡалдырғаны юҡ. Әйтерһең дә, республикалағы бар бәләләргә, аҡсаһыҙлыҡҡа, эшһеҙлеккә, мәхрүмлеккә мәктәптәрҙә дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыу сәбәпсе! Был юлы ла ул һорау күтәрелмәй ҡалмаҫ инде, тип уйлағайным. Әммә федераль баҫмалар һәм агентлыҡтарҙың төбәк вәкиллектәре баш мөхәррирҙәрен был һорау ҡыҙыҡһындырмай булып сыҡты. Президент үҙе башланы һүҙҙе. Тик "Эйе, республикала башҡорт телен уҡытыу менән дә ҡайһы бер проблемалар бар..." тип кенә әйтеп өлгөрҙө. "Час пик" гәзитенең баш мөхәррире Светлана Валеева уны эләктереп тә алды: "Был проблема юҡ республикала, - тине Светлана Викторовна.- Уны ике-өс кеше генә күтәрә. Уны Бигнов әфәнде күтәрә. Ләкин уға кәрәкме икән беҙҙең телдәр? Юҡ, сөнки ул балаларын сит илдә уҡыта. Шуға ла беҙ был һорауҙы Һеҙгә бирергә йыйынмағайныҡ та, хөрмәтле Рөстәм Зәки улы. Мин бына рус ҡатынымын, ирем башҡорт. Балабыҙ ике телде лә өйрәнә. Күп рус милләтле кешеләрҙең балаларының мәктәптә ике, өс телде өйрәнеүенә шатланғанын беләм. Шуның өсөн был һорауҙы ҡуйыртмаҫҡа, уны ябырға кәрәк..."

Рәхмәт был рус ҡатынына. Ул башҡа ҡайһы бер журналистар әйләнгән һайын ҡабатлап, тотош милләтте кәмһетергә тырышҡан был мәсьәлә хаҡында алтын урталыҡтағы һүҙҙе әйтте. Профессиональ журналист яҙған, һөйләгән һүҙҙәрендә, яһаған һығымталарында алтын урталыҡты табелергә тейеш. Ә бер яҡта ғына тороп, бер яҡтың ғына фекерен алға һөрәһең икән, һинең журналислығыңды - ташҡа үлсәйем. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, шундайҙарҙың тауышы көрәрәк ишетелә шул бөгөн...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов "Башҡортостан Республикаһының Аксаков музейы тураһында" ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Республика халыҡтарының милли-мәҙәни ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү, социаль һәм рухи яңырыуға этәргес биреү маҡсатында төбәк башлығы республиканың Аксаков музейын тергеҙергә тәҡдим итте. С.Т. Аксаковтың мемориаль йорт-музейын ремонтлау һәм яңыртыу эштәре лә күҙҙә тотола.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов "Күренекле рус рәссамы, Башҡортостан дәүләт художество музейына нигеҙ һалыусы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре М.В. Нестеровтың тыуыуына 150 йыл тулыуҙы байрам итеү тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы юбилей саралары 2012 йылда үтәсәк.

✓Төбәгебеҙ "2012-2017 йылдарға Башҡортостан Республикаһында мәғлүмәт йәмғиәтенең үҫеше" тигән оҙайлы ваҡытҡа иҫәпләнгән маҡсатлы программа нигеҙендә эш итәсәк. Уның концепцияһы быйыл 1 августа БР Хөкүмәте бойороғо менән раҫланды. Программа ике баҫҡыста тормошҡа ашырыласаҡ. Беренсеһе 2012 - 2013 йылдарҙы солғаясаҡ һәм стратегик маҡсаттарға өлгәшеүҙе тәьмин итерлек саралар пландары әҙерләүҙән һәм өҫтөнлөклө проекттарҙы үтәүҙән торасаҡ. Икенсе баҫҡыста, 2014 -2017 йылдарҙа, стратегик маҡсаттар тормошҡа ашырыласаҡ. Өр-яңы технологиялар 2012 йылдан уҡ индерелә башлаясаҡ. Мәҫәлән, халыҡҡа электрон юл менән дәүләт хеҙмәттәренең бөтәһе 70 төрөн тәҡдим итеү күҙаллана. Был хеҙмәттәрҙе күрһәтеү өсөн йәмғеһе 1200 үҙәк асыласаҡ.

✓Урал арьяғы территорияһында малсылыҡ, умартасылыҡ, етештереү эшмәкәрлеге, ҡымәртләп һәм ваҡлап һатыу эшҡыуарлыҡтың төп тармаҡтары булып тора. Мөшҡөллек үҙегенән үҙ эшен асырға теләгәндәргә бүленгән аҡсаны иң әүҙеме Баймаҡ (67 процент), Хәйбулла (63 процент) һәм Әбйәлил (57 процент) райондары эшҡыуарҙары үҙләштерә, ә иң әҙ процент Учалы районында һәм Сибай ҡалаһында (40 проценттан кәмерәк). Эшһеҙлек буйынса юғары кимәл Ейәнсура районында (1,8 процент), ә иң түбәне Сибай ҡалаһында (1,3 процент) күҙәтелә.

✓ *Сәхнә, сәнғәт, әҙәбиәт, мәҙәниәт талантлылар урыны, ә беҙҙә иһә күберәк осраҡта бер ниндәй ҙә таланттары булмағандар был изге урындарҙы үҙҙәренең йәшәү сығанағына, "тағараҡ"ҡа әйләндергән.*

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ЮРҒАНЫҢА ҠАРАП...

## аяғыңды һуҙ



**Был әйтемде икенсе төрлө итеп "Мөмкинлегеңә ҡарап эш ит" тип әйтеп, бер аҙ ябайлаштырып та алырға булыр ине. Шуға күрә башҡасараҡ юҫыҡта ла фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**

Һәр ваҡыт принципиаль ҡарашлы, тура һүҙле, иң элиталы тип һаналған публика алдында ла хәҡиҡәтте күҙҙәрҙе баҡырайтҡансы әйтә алырлыҡ ҡыйыу йөрәкле кеше ине күренекле шағир һәм яҙыусы Аҫылғужа ағай Баһуманов. Ул яҙыусылар йыйылышымы, ул фәнни-ғилми конференциямы, әллә башҡа төрлө сарамы - һәр ваҡыт төп ҡылда ул уйнап, сараға төҫ һәм йәм бирә торғайны. Бер мәл шулай беҙ, бер тиҫтер ижадсылар араһында милли мөхит, милли кадрҙар хаҡында һүҙ сығып, бәхәс ҡупҡан саҡта арабыҙҙағы иң олоһо булған Аҫылғужа ағайыбыҙ шундайын парадоксаль фекер әйтеп ысҡындырмаһынмы: "Егеттәр, беҙҙең һәр урында, һәр даирәлә эшләүсе милли кадрҙарыбыҙ булырға тейеш. Сөнки сәйәсәт берҙәй үк иң юғары даирәлә лә, урта звенола ла, эшселәр һәм крәҫтиәндәр, зыялылар араһында ла, хатта асарбаҡтар, эскеселәр, наркомандар, фәхишәләр араһында ла эшләнә..."

Ағайҙың был һүҙҙәре, утҡа һибелгән кәрәсин кеүек, зиһенебеҙҙе былҡылдатып тоҡандырып ебәрҙе. Һәр хәлдә, беҙ, уның тирәһенә йыйылған йәштәр, был һүҙҙәргә ҡарата үҙ фекеребеҙҙе белдерергә ашыҡтыҡ. Кем ҡайһы фекерҙе әйткәндер, әммә ошолайыраҡ һүҙҙәр әйтелде барыбер:

-Нимә, эт сапҡанда бет сапҡан, тигән һымаҡ, башҡалар урлай тип беҙгә лә урлаша башларға, наркотик ҡуллана тип наркоман булырға ҡаламы инде?..

-Һәр урында беҙҙең милләт вәкилдәре булырға тейеш булған өсөн генә беҙ наркоманға, фәхишәгә әүерелә башлаһаҡ, был принцип менән ҡайҙа барып сығырыбыҙ билдәле...

-Наркоманлыҡ, фәхишәлек, эскелек, асарбаҡлыҡ - һөҙөмтә, ә маҡсат була алмай...

-Юрғаныбыҙға ҡарап, аяғыбыҙҙы һуҙабыҙ инде, Аҫылғужа ағай, нисек барбыҙ, шулайбыҙ, һеҙ әйткән кире күренештәрҙән милләтебеҙҙе Аллам һаҡлаһын, беҙгә дин юлына аяҡ баҫырға кәрәк...

Оҫта әҙәбиәтсе булған ағайыбыҙҙың гипербола рәүешендә юрый ҡулланған ошо һүҙҙәре беҙҙең күңелдәрҙе тоҡандырып, ана ниндәй фекерҙәр әйттерҙе. Һәр хәлдә, ағайыбыҙ, уҡытыусылар һымаҡ, дидактик формалағы "...беҙҙең милләт вәкилдәре араһында эскеселәр, наркомандар, асарбаҡтар, фәхишәләр булырға тейеш түгел, сөнки...", тигәнерәк һүҙҙәр әйтһә, улар беҙҙең бер ҡолаҡтан инеп, икенсеһенән сығып китеп, мин хатта ошондай ҡыҙыҡлы әңгәмәне иҫемдә лә ҡалдырмаған булыр инем. Һәр хәлдә, үҙ халҡын яратҡан теләһә ниндәй милләт вәкиленең үҙенекеләр араһында эскеселәрҙе, наркомандарҙы, асарбаҡтарҙы, фәшихәләрҙе күрергә теләмәүе аксиома, әммә был осраҡта ағайыбыҙ беҙҙе ошо хаҡта тәрән уйланырға мәжбүр итеп, үҙ маҡсатына иреште, буғай. Икенсенән, ул бында "һәр өлкәләге" тигән һүҙбәйләнештең мәғәнәһен көсәйтер өсөн генә ошондай эпитеттарҙы ҡулланыуы көн кеүек асыҡ.

Ошо бәхәстәге кемебеҙҙер әйткән "юрғаныбыҙға ҡарап, аяғыбыҙҙы һуҙабыҙ", тигән фекер ҙә ҡолағыма һәм хәтеремә айырым асыҡ яғылып ҡалды. Яңылышмаһам, Рәйес Түләк әйткәйне шикелле уны. Ысынлап та, был әйтемгә бик тәрән фекер һалынғанға оҡшаған. Шулай ҙа ни өсөн "Аяғың оҙонлоғона ҡарап, юрған һайла", тип әйтмәгәндәр икән. Ул сағында әйтемдең мәғәнәһе үтә тарайыр ине, сөнки бында "ҡушылыусыларҙың урындарын алмаштырыу менән сумма үҙгәрмәй" тигән принцип бөтөнләй бармай. Әйткәндәй, аяҡ оҙонлоғона ҡарап юрған һайлауҙы "Силәгенә күрә ҡапҡасы", "Күркенә күрә бүрке" тигән үтә ябай әйтемдәр менән алмаштырырға була.

Әммә һәр осраҡта ла юрған үҙ мәғәнәһендәме икән? Әйтәйек, "Аяғың оҙонлоғона ҡарап, юрған һайла", тигәнде алһаҡ, унда "юрған" әйбер, туҡыма йә кейем мәғәнәһен генә бирә. Ә инде "Юрғаныңа ҡарап, аяғыңды һуҙ" тигән әйтемдә беҙ юрғандың күп кенә мәғәнәләрен таба алабыҙ:

1. Мөмкинлек, һәләт һәм талант мәғәнәһе. Әгәр ҙә кеше үҙ мөмкинлегенә, һәләтенә һәм талантына ҡарап эш итмәһә, көтөлгән һөҙөмтә килеп сыҡмаясаҡ. Талантһыҙ көйөнә сәхнәгә сығып кеше көлдөрөүсе әртис йораттарын ғына алайыҡ. Улар бер үк ваҡытта үҙҙәренән дә, милләттән дә көлдөрә. Кем уларҙы сәхнәнән ҡыуалап төшөрөр һуң? Сәхнә, сәнғәт, әҙәбиәт, мәҙәниәт талантлылар урыны, ә беҙҙә иһә күберәк осраҡта бер ниндәй ҙә таланттары булмағандар был изге урындарҙы үҙҙәренең йәшәү сығанағына, "тағараҡ"ҡа әйләндергән.

2. Сама мәғәнәһе. Әгәр ҙә кеше һәр нәмәлә лә саманы онотһа, холоҡһоҙланһа, уның асылы, юрғандан оҙон булып һуҙылып сыҡҡан аяғы кеүек, кемлеген белдереп, башҡаларҙы көлдөрөп торасаҡ. Һәр нәмәлә лә сама белеү мөһим шул. Сама саманан артмай, тип тә әйтәләр.

3. Әҙәп, әхлаҡ, намыҫ мәғәнәһе. Һәр кешенең, милләттең үҙ әҙәбе, үҙ әхлағы һәм намыҫы була, улар кешене башҡалар алдында йәмһеҙ һәм ҡотһоҙ итеп күрһәтә торған ниндәйҙер аҙымдарҙан һәм ғәмәлдәр башҡарыуҙан аралап тора.

4. Хоҡуҡ мәғәнәһе. Әйтәйек, аҡһаҡалдар, ололар йыйылған табында яндырай йәш кеше ниндәйҙер ярамаған һүҙ әйтеп ысҡындырһа, "бер һыйыр бөтә көтөүҙе буяй" тиҙәр. Миҫалға Степан Злобиндың "Салауат Юлаев" романындағы бер ваҡиғаны алайыҡ. Унда өлкәндәр араһында ултырырға хоҡуғы булмаған Салауат ҡатындар аш яраштырған ҡаҙанлыҡ тирәһендә йөрөүҙе оло ғәрлек һанап, урманға барып айыу менән алыша һәм уны еңә. Был яҙыусы тарафынан табылған бик көслө деталь. Кем белә, бәлки, быңдай хәл ысынлап та Салауат батыр тормошонда булғандыр. Һәр хәлдә, үҫмер Салауат өлкәндәр араһында ултырыу хоҡуғы барлығын айыуҙы еңеп иҫбат итә. Йәғни, юрғанының аяғына таптаман икәнлеген батырлыҡ күрһәтеп раҫлай.

5. Тормош ысынбарлығы, реаллек мәғәнәһе. Динебеҙҙең спиртлы эсемлектәрҙе хәрәм тип танып, уны ҡулланыуҙан тыйыуы уны ҡулланған кешенең тормош ысынбарлығынан айырылып, хыялға бирелеүенә лә бәйле. Хыялға бирелгән кеше Аллаһы Тәғәләне онота һәм гонаһҡа бата. Ә инде башҡа осраҡтарҙа тормош ысынбарлығынан айырылған кеше хыял диңгеҙендә йөҙөп, үҙенең алдына бойомға ашмаҫлыҡ маҡсаттар ҡуя ла, һуңынан ауыр тойғолар кисерә, депрессияға бирелә.

6. Үҙ-үҙеңә дөрөҫ, объектив баһа, үҙеңә тәрән ышаныу мәғәнәһе. Ундай кешенең аяғы менән юрғаны типә-тиң була.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҺУҢЛАҒАН ТӘРБИӘ

Концертта ултырабыҙ. Олатай менән өләсәй өс йәштәр самаһындағы ҡейәнсәре менән килгән. Тик ейәнсәргә концерттағы бер сығыш та оҡшамай, борғолана, һырғылана. Сәхнәлә йырланған башҡортса йыр ҙа, бейеүҙәр ҙә, нәфис һүҙ ҙә, хатта юмор ҙа ҡыҙыҡһындырмай уны. Сөнки ул сәхнәлә яңғыраған телде лә, моңдо ла аңламай. Ә олатай менән өләсәй ейәнсәрҙәренең иғтибарын сәхнәгә йүнәлтеү өсөн тырышыпмы тырыша. Бына бер мәл ҡыҙсыҡтың түҙемлеге шартланы һәм:" Не нравится мне этот танец. Не хочу слушать эту вашу музыку", - тип ысҡындырҙы. Ҡарт олатай менән өләсәй, уңайһыҙлынып, тирә-яғын байҡап алды, минең уларҙы күҙәтеүемде шәйләп, яурын һелкетеп, йылмайып ҡуйҙы икеһе лә...

Аңлашыла: был олатай менән өләсәйҙең улы йә ҡыҙы урыҫ милләтле кеше менән ғаилә ҡорған һәм был бала ана шул ҡатнаш никахтан тыуғандыр. Башҡорт олатай менән өләсәй ейәнсәргә үҙ телендәге тамашаны күрһәтмәксе, үҙ йырының әһәңен ишеттермәксе иткәндер инде. Заманында үҙ балалары менән быны эшләргә ваҡыттары булмағандыр, йә быны кәрәкле тип тапмағандыр, үҙ милләтеңә балалар үҫтерергә кәрәк, тигән аҡылды ла һеңдермәгәндер. Шуға ла телгә лә, милләтенә лә битараф булып үҫкәндер балалары. Битарафтан битараф тыуа. Был олатай менән өләсәй һуңлаған: уларҙың ейәнсәре ниндәй генә бүреккә һалһаң да урманға ҡарай ҙа торасаҡ. Йәл ошондай ҡороған ағасҡа оҡшаш ҡарттар...

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Башҡортостан" гәзите редакцияһы Башҡортостан Яҙыусылар союзы менән берлектә "Ҡәләмгир" конкурсы иғлан итте. Маҡсаты - матбуғаттың халыҡ алдындағы абруйын, һүҙҙең бәҫен күтәреү, бөтәбеҙҙе борсоған һем ҡыҙыҡһындырған мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшеү, көн ҡаҙағына һуҡҡан проблемаларҙы ҡыйыу яҡтыртыу, кешеләрҙең йәшәйешен ыңғай яҡҡа үҙгәртерлек яңы ниәттәр эҙләү. Конкурсҡа йомғаҡ теүәл бер йылдан һуң яһала. Еңеүселәр диплом һәм электрон техника менән бүләкләнәсәк.

✓Ошо көндәрҙә Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт драма театры сит илдән гастролдәрҙән ҡайтты. Коллектив Төркиәнең Акшехир ҡалаһында үткән Хужа Насретдин исемендәге фестивалдә ҡатнашып, Мостай Кәримдең "Ҡыҙ урлау" комедияһын күрһәтеп, ҡала мэры Абдулҡадир Огул ҡулынан гәлсәр кубок алыуға өлгәште. Төрки телле театрҙар донъяһында ҙур танылыу яулаған был форум быйыл 52-се тапҡыр үткәрелгән. Төрки телле илдәрҙән тыш фестивалдә Германия, Португалия, АҠШ театр коллективтары ла ҡатнашҡан.

✓Быйылғы йәйҙә балалар ял һәм һауыҡтырыу учреждениелары тәүге ике сменала уңышлы эшләгән. Дөйөм алғанда, ике сменала 280 меңдән ашыу бала һәм үҫмергә төрлө формалағы ял һәм һауыҡтырыу саралары ойошторолған. Рәсәй ҡаҙнаһынан бүленгән аҡсаға - ауыр тормош хәлендә ҡалған 3203, республиканыҡынан 60 мең, шул иҫәптән алты мең етем балаға путевка бирелгән. Өсөнсө сменала өс меңдән ашыу учреждение эшләйәсәк. Йәйге каникулда ял иткән, һаулығын нығытҡан, эш менән тәьмин ителгән балаларҙың дөйөм һаны 400 мең тирәһе буласаҡ, тип күҙаллана.

✓5-16 августа БР Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты Башҡортостандың Туризм индустрияһы союзы менән берлектә Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиокомпанияһы өсөн матбуғат туры ойоштора. Мәскәү журналистары Башҡортостандың тәбиғәте, тарихи һәм мәҙәни урындары тураһында документаль фильм төшөрөргә йыйына. Төркөм ҡурсаулыҡтарҙа, шифаханаларҙа, "Шүлгәнташ" мәмерйәһендә, Йомағужа һыу һаҡлағысында, Ирәмәл һәм Шихан тауҙарында буласаҡ. Сәфәр барышында улар башҡорттарҙың мәҙәниәте һәм йолалары, балаҫ һуғыу, ҡымыҙ бешеү шөғөлдәре менән танышасаҡ, йылҡысылыҡ хужалыҡтарына барасаҡ, милли аш-һыуҙан ауыҙ итәсәк. Сәйәхәт һөҙөмтәһендә БР тураһында ике фильм төшөрөләсәк.

## ЕТЕ РАЙОН

**Совет** районында Өфө ҡалаһында йыл һайын уҙғарылып килгән сираттағы бал йәрминкәһенә әҙерләнеү һәм уны үткәреү буйынса тәүге ултырыш булды. Йәрминкә 10-11 сентябрҙә Йәштәр мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда уҙасаҡ. Республиканың төрлө райондарынан килгән умартасылар һатып алыусылар өсөн йүкә, сәскә, ҡарабойҙай, кәрәҙ, солоҡ, шулай уҡ ҡортсолоҡ продукцияһы тәҡдим итәсәк.

**Ленин** районында урынлашҡан "Волна" скверында бынан ике йыл элек Тыуған ил тыныслығын һаҡлаусылар иҫтәлегенә символик мәғәнәгә эйә таш һалынғайны. Бөгөн ошо урында үҙенең хеҙмәт бурысын үтәгәндә һәләк булған Башҡортостан Һауа-десант ғәскәрҙәре яугирҙарына һәйкәл ҡуйылды. Мемориалға ҡуйылған йөндәҙгә БТР-70, ә машина корпусына парашюттың металлик каркасы - "зәңгәр беретлылар" символы төшөрөлгән.

**Калинин.** Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының Иҡтисади енәйәттәргә ҡаршы көрәш идаралығы оперативниктары Калинин районында бер юлы ике уйын клубы эшмәкәрлеген туҡтатты. Уларҙың береһе - Беренсе Май, ә икенсеһе Калинин урамында урынлашҡан булған. Бында 20-нән ашыу уйын автоматы табылған һәм барыһы ла тартып алынған. Законлаштырылмаған ойошмалар буйынса бөгөн тикшеренеүҙәр алып барыла.

**Дим.** Юлдар сифаты насар булыуы йәмғиәттә ҙур ғына тынысһыҙлыҡ тыуҙыра. Йәйәүлеләргә лә, автомобиль эйәләренә лә уңайлы юлдар кәрәк. Был йәһәттән Дим районында ҡыҙыу эштәр алып барыла. Өфө ҡалаһы Торлаҡ хужалығы идаралығының Дим районында урынлашҡан филиалы директоры урынбаҫары Р.Даянов билдәләүенсә, 1 июлгә Дим районында 7 ихата территорияһы төҙәкләндерелгән, ә 1 августа уларҙың һаны 14-кә еткән. Хәҙер Дим районы юлдары уңайлыраҡ, подъездары йәмлерәк булып ҡалған.

**Орджоникидзе.** "Ләлә" мәсетендә Ҡөрьән уҡыусыларҙың "Мин исламды өйрәнәм" балалар һәм үҫмерҙәр конкурсы булып уҙҙы. Йыл һайын уҙғарылған был конкурста быйыл Һамар, Силәбе, Ҡурған, Ульяновск, Екатеринбург өлкәләренән дә мәктәп уҡыусылары ҡатнашты. Конкурстың еңеүселәре ҡиммәтле бүләктәр менән бүләкләнде.

**Октябрь.** Сипайлово биҫтәһендә кәйеф-сафа ҡоролған урындар буйлап профилактик рейд үтте. Бындағы магазин һәм киоск һатыусылары, закон тыйыуҙарына ҡарамаҫтан, һаман да үҫмерҙәргә алкоголле эсемлектәр һатыу менән булыша. Балалар эскелеге өлкәндәрҙең уларға ҡарата вайымһыҙ мөнәсәбәтенән килә икәнлеге бер кемгә лә сер түгел. Рейдты ойоштороусылар, үҫмерҙәрҙең сәләмәт тормошона вайымһыҙ булмаусылар уларҙың башланғысын күтәреп алыр, тип өмөт итә.

**Киров.** Республика үҙәк иппотерапияһында ат спорты буйынса асыҡ фестиваль булып үтте. Унда Өфө ҡалаһы һәм яҡын райондарҙың ат-спорт клубы тәрбиәләнеүселәре ҡатнашты. "Алтын ял" атспорт клубы тәрбиәләнеүсеһе 10 йәшлек Софья Никишина фестивалгә тәүге еңеүҙе алып килде. Фестиваль кубогын иң күп бүләкләүҙәр алған Республика үҙәк иппотерапияһы яуланы.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# РЕСПУБЛИКА ПАТРИОТЫ БУЛ,

## үҙебеҙҙең ризыҡты аша!




**Республика Президенты Рөстәм Хәмитовтың тәҡдименә ярашлы, 25 июлдә Башҡортостан Сауҙа ассоциацияһы инициативаһы менән "Үҙеңдекен һайла - үҙеңдекен һатып ал!" девизы аҫтында акция старт алды һәм ул ағымдағы йылдың аҙағына тиклем дауам итәсәк. Бөгөнгө көнгә республиканың 300-ҙән ашыу сауҙа предприятиелары һәм етештереүсе ойошмалар акцияла ҡатнашырға теләк белдерҙе.**

- Беҙ республикабыҙ патриоттары булараҡ, үҙебеҙҙең тауар етештереүселәргә ярҙам итеү маҡсатында республика халҡын Башҡортостанда етештерелгән азыҡ-түлекте һатып алырға саҡырабыҙ, - тине Башҡортостан Сауҙа ассоциацияһы рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Илдар Ғарифуллин. - Акция республикала етештерелгән тауарға халыҡтың иғтибарын арттырыу, Башҡортостандың тауар етештереү һәм сауҙа ойошмалары араһында бәйләнеште нығытыу, тауар ассортиментын күбәйтеү кеүек мәсьәләләрҙе хәл итеүгә йүнәлтелгән. Шулай уҡ акция урында етештерелгән тауарҙың конкуренцияға һәләтлеген арттырасаҡ һәм ҡулланыусылар баҙарын сифатлы һәм файҙалы тауар менән тулыландырасаҡ.

Акция ҡулланыусылар араһында киң билдәлелек яулар һәм көтөлгән һөҙөмтәләр килтерер тип ышана ойоштороусылар. Акцияла ҡатнашыусылар хаҡында яңыртылған мәғлүмәт ай һайын Башҡортостан Сауҙа ассоциацияһы сайтына ҡуйыласаҡ.

- Иғлан ителгән акция күптән өлгөргән мәсьәлә. Магазин һәм сауҙа предприятиелары кәштәләре республикала етештерелгән тауар менән тулыландырылған булыуына ҙур иғтибар бүлергә тейешбеҙ, - тине Башҡортостан Республикаһының сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡын яҡлау дәүләт комитеты рәйесе Илдар Әхмәтшин. Илдар Илдус улы билдәләүенсә, "Үҙеңдекен һайла - үҙеңдекен һатып ал!" акцияһы Башҡортостан Сауҙа ассоциацияһы инициативаһы менән уҙғарылған башҡа акцияларҙың дауамы булып тора. Мәҫәлән, "Социаль кәрзин", "Республиканыҡын һатып ал!" акциялары үткән йылдарҙа уңышлы башланып, әлеге көндә лә дауам итә. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Марат Ғәлиуллин да ағымдағы акцияның алдан әҙерләнгән нигеҙгә таянып эш башлауын билдәләп үтте һәм акцияға республиканың тағы ла күберәк тауар етештереүсе ойошмалары һәм сауҙа нөктәләре ҡушылыр, тигән ышаныс белдерҙе. Ул шулай уҡ Өфө ҡалаһындағы тауар етештереүселәрҙең был акцияны күтәреп алырға тулыһынса әҙер икәнлеген дә билдәләп үтте.

Акцияның уңышлы үтеүенә 17 сентябрҙә башланасаҡ ауыл хужалығы тауарҙары йәрминкәләре лә булышлыҡ итер тип күҙаллана. Ғәҙәттәгесә, бал һатыу менән асыласаҡ был йәрминкәләр Яңы йыл байрамдарына тиклем дауам итәсәк һәм ауыл хужалығы тауарҙары етештереүселәргә үҙ тауарынан килем алыу, ә һатып алыусыларға сауҙа өҫтәмәләре ҡушылмаған хаҡ менән йәшелсә-емеш туплау мөмкинлеге бирәсәк.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.**

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

# ҠЫТАЙ ТАУАРЫ...

## баҫты баҙарҙы

**Башҡортостанға индерелгән импорт тауарҙар араһында сит ил машиналары өҫтөнлөк итә. Нидерланды, АҠШ һәм Ҡытай 2011 йылдың беренсе ярты йыллығында Башҡортостандың төп тышҡы сауҙа партнерына әйләнгән. Был илдәр өлөшөнә экспорттың дөйөм күләменең 40 процент тирәһе тура килә.** Импорт буйынса тәүге өс урынды Үзбәкстан, Ҡытай һәм Украина биләй - улар сит илдән индерелгән тауарҙың 51,7 процентын тәшкил иткән. Башҡортостан таможняһы мәғлүмәт хеҙмәте белдереүенсә, былтыр урындағы эшҡыуарҙар донъяның 85 иле менән эшлекле мөнәсәбәт булдырған. Тышҡы сауҙа әйләнеше 1860,2 миллион АҠШ долларын тәшкил иткән. Шул иҫәптән экспорт - 1602 миллион (тышҡы сауҙа әйләнешенең 86,1 проценты), импорт - 257,8 миллион (13,9 процент). 2010 йылдың ошо уҡ ваҡыты менән сағыштырғанда тауар әйләнеше 4,6 процентҡа кәмегән. Был күбеһенсә экспорттың кәмеүенә бәйле (8,8 процент). Ә импорт күләме, киреһенсә, 33,4 процентҡа артҡан.

Экспорт тауар структураһында ТЭК продукцияһы (54,2 процент), химик сәнәғәт (29,9 процент), шулай уҡ металл һәм металдан эшләнгән (7 проценттан ашыу) продукция күләме күпселекте тәшкил итә. Республикаға индерелгән продукцияның 60 проценттан ашыуы машина төҙөү тармағына ҡайтып ҡала: был күберәк еңел машинаға ҡағыла. Икенсе урынды - химик сәнәғәт (16,4 процент), өсөнсө урынды металл (9 процент) һәм унан эшләнгән әйберҙәр биләй. Шулай уҡ 2010 йыл менән сағыштырғанда, алыҫ сит илдәр менән сауҙа күләме лә артҡан. Ә БДБ илдәре менән эш итеү, киреһенсә, кәмегән.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Баш ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә Өфөләге спорт тормошо тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Быйыл ярты йылда Өфөлә 276 спорт мастеры, 297 спорт мастерлығына кандидат һәм халыҡ-ара класлы алты спорт мастеры әҙерләнгән. Ошо уҡ осорҙа баш ҡалала 980 спорт сараһы уҙғарылған, уларҙа 183 мең кеше ҡатнашҡан. Өфөнөң спорт тормошонда ҡайһы бер үҙгәрештәр күҙаллана. Мәҫәлән, ҡала райондары араһындағы ярыштарҙы предприятиелар һәм ойошмалар коллективтары араһындағы ярыштар алмаштырасаҡ. Мәктәп уҡыусылары спартакиадаларына йомғаҡ райондар буйынса түгел, ә һәр мәктәп өсөн айырым яһаласаҡ. Республика ярыштарында баш ҡала намыҫын берҙәм команда яҡлаясаҡ.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Өфөләге 5-се республика мәктәп-интернатының спорт комплексын төҙөү барышы менән танышты, бокс, дзюдо, волейбол, фехтование, баскетбол һәм мини-футбол менән шөғөлләнеү өсөн тәғәйенләнгән заманса йыһазландырылған залдарҙы ҡараны. Экскурсия барышында мәктәп-интернат директоры Рөстәм Хәмитовҡа урындарҙың етмәүе һәм уҡыусылар йәшәү өсөн ике корпус төҙөргә кәрәклеге хаҡында хәбәр итте. Башҡортостан Президенты башланғысты хупланы һәм, аҡса республиканың 2012 йылғы бюджетынан бүленәсәк, тип билдәләне. Комплексты асыу 30 августа тәғәйенләнгән.

✓Башҡортостан Хөкүмәте бойороғо менән Ураҙа байрамын билдәләгән көн, 2011 йылдың 30 авгусы, ял һәм байрам көнө тип иғлан ителде. Дүшәмбе, 29 августа, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡартыла. Хеҙмәт кодексына ярашлы, йыллыҡ төп йәки өҫтәмә түләүле отпуск биргәндә Ураҙа байрамындағы ял һәм байрам көнө отпускының календарь көндәренә индерелмәй, тип аңлаттылар республиканың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығында.

✓Беренсе канал Башҡортостан тураһында документаль фильм төшөргән. Был маҡсат менән "Хочу знать" программаһының тележурналистар төркөмө Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрйән, Йылайыр райондарында һәм Сибай ҡалаһында булып ҡайтҡан. Ҡунаҡтар башҡорт халҡының кәсептәре, кәрәк-яраҡтары, тормошо, ғөрөф-ғәҙәттәре менән ҡыҙыҡһынған.

*ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ*

# АЙЫҠ КӨЙӨ ЛӘ...

## йырлап-бейеп була

**Уҙған аҙнала Баймаҡ районында урынлашҡан Граф күле буйында сираттағы Башҡорт йәштәре көндәре булып үтте. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, Башҡорт йәштәре иттифағы, республиканың Мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлыҡтары менән берлектә үткәрелгән, Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылына арналған был сара тағы ла бер тапҡыр бөгөнгө йәштәребеҙҙең матур итеп, айыҡ байрам итә белеүен иҫбатланы. Байрам уҙғарылған биләмәлә алкоголле эсемлектәрҙе һатыу һәм ҡулланыу ҡәтғи тыйылды, хатта биләмәгә ингән саҡта ойоштороусыларҙың махсус төркөмө һәр машинаны ҡарап, тикшереп торҙо. Йәштәрҙе берләштереү, бер-береһе менән аралаштырыу, сәләмәт йәшәү рәүеше ҡағиҙәләренә ылыҡтырыу, рухи тәрбиә биреүҙе маҡсат итеп үткәрелгән байрам төрлө уйын-конкурстарға, мәҙәни сараларға бай булды. Байрамға килеүселәр менән аралашҡан мәлдә беҙ был сара тураһында ғына түгел, ә бөгөнгө йәш кешене борсоған проблемалар тураһында ла фекерҙәр туплаными. Ул әңгәмәләр киләсәктә гәзит биттәрендә донъя күрер. Ә хәҙер байрам тураһында бер нисә фекер.**



Силәбе өлкәһенең башҡорт йәштәре.

**Флорид БАГАЕВ, Башҡорт йәштәре иттифағы етәксеһе:** Байрамда Башҡортостанда йәшәүселәрҙән тыш, Силәбе, Һамар өлкәләре башҡорттары, башҡа милләт йәштәре ҡатнашыуы ла ҡыуандырҙы. Күптәр сәләмәт тормош яҡлы булыуын йыйын биләмәһенә ингәндә үк асыҡ күрһәтте, көрәш, волейбол һәм башҡа төр уйындарҙа әүҙем ҡатнашты. Ҡыҙҙар өсөн "Йыйын һылыуы" матурлыҡ конкурсы, ә егеттәр өсөн "Урал бөркөтө" тип исемләнгән бәйге уҙғарҙыҡ. Башҡорт рэп музыка йүнәлешен үҫтереү буйынса йыл буйына бик күп батлдар ойоштороғайныҡ, бөгөн шул ярыштарҙа ҡатнашыусылар тағы бер тапҡыр үҙ көстәрен ошо майҙанда һынаны. Быйылғы сараның форматына бер аҙ үҙгәрештәр ҙә индерелде: йәштәр араһында эшҡыуарлыҡты үҫтереү маҡсатында тәүге тапҡыр Селигерҙағы кеүек бизнес-тренинг ойошторолдо. Уларҙы киләсәктә лә үткәреп торорға тырышасаҡбыҙ. Сәләмәт һәм айыҡ йәш быуын тәрбиәләргә булышлыҡ итеү республика етәкселәре, башҡа органдар менән бергәләшеп хәл итер мәсьәләләрҙең иң мөһиме ул. Ошо маҡсатыбыҙға ниндәйҙер кимәлдә өлгәшә алдыҡ, тип уйлайым.

**Фәнзил ӘХМӘТШИН, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының йәштәр бүлеге рәйесе:** Быйылғы Башҡорт йәштәре көндәрен ойошторғанда йәштәрҙең үҙҙәренең әүҙемерәк ҡатнашыуы ҡыуандырҙы. Шулай уҡ конкурстарҙа ҡатнашыусыларҙы бүләкләүҙәр башҡа йылдарға ҡарағанда юғарыраҡ кимәлдә ойошторолдо, сөнки Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Марсель Харис улы Йосопов приздар өсөн сығымдарҙы үҙ өҫтөнә алды.

Мәғлүмәти яҡтан яҡтыртыу етерлек кимәлдә булмағанға күрә, йәштәрҙең күбеһе сара тураһында белмәй ҡалды. Шуға күрә был сараны йыл һайын билдәле бер көндә, билдәле бер урында үткәреүҙе йәйға һалырға кәрәк. Ул саҡта кешеләр байрам үтәсәк көнгә ҡарай дуҫтарын, туғандарын саҡырып, ялдарын тура килтерергә тырышасаҡ, тип уйлайым.

Күңелде ҡырғаны шул булды: айыҡ сара үткәрелеүе тураһында яҡшы хәбәрҙар булһалар ҙа, байрам майҙанына тиҫтәгә яҡын йәш егет иҫерек килеш үтергә маташты. Башҡорт йәштәре ойошторған һәр сара айыҡ үткәреләсәк - был ҡәтғи ҡарар.

**Роберт ДӘҮЛӘТШИН, "Айыҡ Башҡортостан" йәмәғәт ойошмаһы рәйестәше:** Беҙҙең йәштәр башҡа милләт йәштәренән тәрбиәһе, фекерләү рәүеше менән айырылып тора. Уларға иманлы булыу төҫ. Иман булһа, тәртип тә, ололарға, кеселәргә ҡарата ихтирам да, айыҡ һәм сәләмәт тормош та, тарих менән ҡыҙыҡһыныу ҙа, үҙеңдең һәм халҡыңдың яҡты киләсәген ҡайғыртыу ҙа буласаҡ. Бының өсөн тәү сиратта беҙҙең үҫеште тотҡарлап тороусы факторҙарҙан азат булыу кәрәк. Мәҫәлән, йәштәребеҙ йыйылған һәр урында алкоголь, тәмәке ҡулланыуҙы, уны һатыуҙы тыйырға тейешбеҙ. Бөгөнгө Башҡорт йәштәре көндәрендә алкоголле эсемлектәрҙе һатыу һәм ҡулланыу тыйылыуы бик урынлы һәм яҡшы башланғыс булды. Киләсәктә ҡайһы бер башҡорт йәштәренең үҙ-үҙҙәренә вайымһыҙ ҡарашы, һаулыҡҡа зыян килтереүсе ҡылыҡтарға бирелеүе кәмер, тип ышанам. Ул саҡта инде, боронғо замандарҙағы кеүек, башҡорт йәштәре барлыҡ милләт вәкилдәренә өлгө булып торорлоҡ рухи байлыҡҡа эйә булыр.

**Сәймә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА, студент:** Байрамды ойоштороусылар тырышҡан, хеҙмәт һалған. Тик ойоштороусыларҙың хеҙмәтен баһаламаған, өмөтөн аҡламаған тамашасылар булыуы ғына миңә ауыр тәьҫир итте. Нимәлә күренде һуң был? Башҡорт йәштәре көндәрен айыҡ байрам тип иғлан итеп тә, ойоштороусыларҙы уңайһыҙ хәлдә ҡалдырып, байрам биләмәһенә алкоголле эсемлектәр индерергә тырышыусы бер нисә кеше миҫалында. Нәҡ ошо рәүешле улар барлыҡ өмөттәрҙе, теләктәрҙе селпәрәмә килтерә яҙҙы. Байрамдан ҡайтҡас, бер танышымды осратып, һөйләшеп торған арала уның: "Йәштәр көнөндә юлды ҡаплап тикшереп торһалар ҙа беҙ барыбер үҙебеҙ менән һыра алып индек ул", - тигән һүҙҙәре шаңҡытты. Эстән генә уға ҡарап әсенеп ҡуйҙым. Башҡорт йәштәре хәрәкәтендә йөрөүселәр ошондайҙарҙы дөрөҫ юлға төшөрөргә, үҙ халҡының лайыҡлы улдары-ҡыҙҙары яһарға тырыша - баһалау юҡ. Ҡасан ғына беҙ берҙәм булып, һәр беребеҙ илебеҙ, милләтебеҙ мәнфәғәтен алға ҡуйып йәшәй башларбыҙ, тип борсолдом.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт йәштәре көндәренең айыҡ байрам итеп үткәрелеүе күп кенә йәштәр тарафынан да, бигерәк тә ололар яғынан ҙур хуплау тапты. Киләһе йылдарҙа халыҡ бындай сараларҙың эскеһеҙ үтеүенә тамам күнегер, йыйындар барышында эскегә бәйле йәмһеҙ күренештәргә юл ҡуйылмаҫ, тигән ышаныс артты. Ә инде йыйында аралашырға тура килгән йәштәребеҙҙең айыҡ ҡарашлы, милләте алдында яуаплы булыуҙары, алдарында торған бөтә проблемаларҙы үҙаллы сисергә тырышып тороуы, битараф булмауы ҡыуандырҙы.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

*ҺОРАУ-ЯУАП*

## РИЗА БУЛМАҺАҢ - ҒАРИЗА ЯҘ

**Элекке ҡатыным 10 йәшлек улым менән сит илгә ялға йыйына, ләкин, һиҙемләүемсә, улым башҡаса бында әйләнеп ҡайтмаясаҡ. Мин уның китеүенә ҡамасаулай аламмы?**

Эйе, быны эшләй алаһығыҙ ("Рәсәй Федерацияһынан сығыу һәм Рәсәй Федерацияһына инеү тәртибе тураһында" закондың 21-се статьяһын ҡара). Бының өсөн йәшәгән урынығыҙ буйынса миграция хеҙмәтенә йәки сик контроле органына улығыҙҙың сит илгә сығыуына риза булмауығыҙҙы белдереп, ғариза яҙығыҙ. Ғаризағыҙға паспортығыҙҙы һәм атайлыҡ хоҡуғығыҙҙы раҫлаусы документтарҙың күсермәһен теркәгеҙ.

Ғаризаларҙы ҡарау һәм улар буйынса ҡарар ҡабул итеү тәртибе Федераль миграция хеҙмәте тарафынан РФ Эске эштәр министрлығы, Сит ил эштәре министрлығы һәм Федераль именлек советы менән килешеү нигеҙендә атҡарыла.

Тик шуны ла иҫтә тотоғоҙ: балағыҙҙың сит илгә сығыу мөмкинлеге тураһында закон көсөнә ингән суд ҡарары булған хәлдә һеҙҙең ғаризағыҙ ҡаралмаясаҡ.

## ҮҘ ӨЛӨШӨГӨҘ - ҮҘЕГЕҘГӘ

**Ейәндәрем менән йәшәйем, һәр беребеҙ фатирҙың өстән берәр өлөшөнә эйәбеҙ. Улар үҙ өлөштәрен айырып алып, һатырға, ә мин ҡаршы булған хәлдә, өлөшөм өсөн миңә компенсация түләргә хаҡлылармы?**

Юҡ, хаҡлы түгелдәр. Һеҙҙең өлөш менән эш итергә уларҙың хоҡуғы юҡ. Әгәр өлөшөн айырып биреүҙе үҙе талап итмәһә, милексегә уның өлөшө өсөн мәжбүри компенсация түләү тыйыла. Был турала РФ Юғары судының граждандар эше буйынса Суд коллегияһының 2010 йылдың 7 декабрендәге билдәләмәлә (30-В10-9) әйтелә.

Ейәндәрегеҙ үҙ өлөштәрен айырып алырға, уға милекселек хоҡуғын юлларға, өлөштәрен һеҙҙең ризалыҡ менән һатырға (иң тәүҙә һеҙгә һатып алырға тәҡдим итергә тейештәр) хоҡуҡлы, ләкин һеҙҙе үҙегеҙҙең өлөшөгөҙҙө айырып алырға мәжбүр итә алмайҙар. Компенсация түләү менән бәйле ҡағиҙә фәҡәт үҙ өлөшөн талап иткән өлөш ҡатнашсыһына ҡарата ғына ҡулланылыуы мөмкин. Был осраҡта ла бер нисә шарт бар: уның өлөшө әллә ни ҙур булмаһа һәм асылда уны айырып бүлеү мөмкин булмаһа һәм ул дөйөм милекте файҙаланған саҡта бигүк әһәмиәтле булмаһа.

Шулай итеп, РФ Граждандар кодексы үҙ өлөшөн талап итмәгән милексене уның ихтыярынан тыш компенсация түләп, уны милкенән мәхрүм итергә юл ҡуймай.

**Фәүзиә ИШБИРҘИНА**
**әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы

## Бөйөр ауырыуҙары



Бөйөр һәм йөрәк ауыртҡанда ныҡ шешенһәгеҙ: 10 гр ҡайын бөрөһөнә 200 мл ҡайнар һыу ҡойоп төнәтергә. Көнөнә өс тапҡыр икешәр ҡалаҡлап эсергә. Дауаны 10-14 көн дауам итергә. Май айында йыйылған ҡайын япраҡтары ла бөйөр ауырыуҙары булған кешеләр өсөн файҙалы.

Бөйөр, бөйөр лаҡаны (почечная лоханка), һейҙек ҡыуығы ауырыуҙары булғанда: 10 гр ҡайын япрағы, 30 гр кесерткән япрағы, 10 гр ҡара ҡарағат япрағы, 20 гр юл үләне япрағы, 20 гр ҡыҙыл көртмәле япрағы, 40 гр гөлйемеш (төйөлгән емештәре), 60 гр ҡырҡбыуын үләнен бергә болғатырға. Ошо ҡатнашманы 5-6 гр алып, ярты литр ҡайнар һыу менән ярты сәғәт утта тоторға, ҡайнатмаҫҡа. Гломерулонефрит ауырыуының ҡиҫкенләшкән сағы булғанда ҡырҡбыуындың күләмен ике тапҡырға кәметеп алырға. Бөйөргә таш ултырып ауырығандарға ошо ҡатнашмаға 25 гр аҡ сәскә ҡушып ебәрергә кәрәк.

## Ҡан баҫымы

20-шәр гр ҡайын япрағы, юл япрағы үләне, үгәй инә үләне, мәтрүшкә, 30-ар гр ҡырҡбыуын, һуҡыр кесерткән (пустырник), мелисса, әнис (орлоғо һәм япраҡтары), шиңмәҫгөл (бессмертник песчаный, цветки), 40-ар гр энәле менән гөлйемеште төйөп алып, бергә ҡушып болғатырға. Ошо ҡатнашманы 5-6 гр алып, ярты литр ҡайнар һыу менән бешекләп, ярты сәғәт эҫелә тотоп төнәтергә, ҡайнатмаҫҡа. Һөҙөп алғас көнөнә өс тапҡыр ашарҙан 15 минут алда 150 мл эсергә. Юғары ҡан баҫымының беренсе һәм икенсе стадияһында файҙалы.

Юғары ҡан баҫымы, атеросклероз менән яфаланыусыларға яҙлы-көҙлө әселек (горечь) ҡабул итеп алыу яҡшы файҙа бирә. 10-ар гр бәпембә япрағы һәм сәскәһе, әрем, 15-әр гр меңъяпраҡ үләне, 5-әр гр ҡыҙыл тал (верба) ҡайырыһын алып бергә болғатҡас, 5 гр ҡатнашманы 150 мл ҡайнар һыу менән төнәтеп, көнөнә ике тапҡыр, иртән һәм төшкөһөн 50 мл эсергә.

## Сәстәр өсөн

Кесерткәнде йыйып, уға 50 грамм үгәй инә үләне ҡушып, төнәтеп, аҙнаһына 2-3 тапҡыр сәстәрҙең төбөнә ышҡып һөртөп ҡуйһағыҙ, улар матурайып, нығынып китер.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

✓ *"Фалес", "салес", "Номос-банк", "Эльдорадо" кеүек испан конкистадорҙары эҙләгән алтын районы атамаһын Өфө урамдарына килтереп тағырға кемдең намыҫы етте лә, уға кем рөхсәт итте һуң?*



БЕЛЕМ УСАҒЫ



# КЕМ БУЛЫРҒА?

## Ошо һорауға яуап эҙләгән мәл

**Башҡортостан абитуриенттары менеджер һәм идарасы булырға теләй. Ә хоҡуҡ белгесе булыуға теләүселәр һаны кәмегән.**

Кисәге мәктәп уҡыусылары араһында быйыл Өфө авиация техник университетының көндөҙгө бүлегенә уҡырға инергә теләүселәр 17 меңдән ашып киткән. Икенсе урында Башҡорт дәүләт университеты: был юғары уҡыу йортонда уҡырға теләүселәр һаны 14 мең. Өсөнсө урында Өфө нефть техник университеты: 13 меңдән ашыу абитуриент нәҡ ошо уҡыу йорто студенты булырға теләй. Ә иң аҙ ғариза - 3380 - Башҡорт дәүләт медицина университетына тапшырылған.

Буласаҡ студенттар башлыса менеджер һәм идарасы булырға теләй. Быйыл иң ҙур конкурс "Менеджмент" бүлегендә: бында бер бюджет урынға бер юлы 151 кеше дәғүә итә! Ошо уҡ һөнәр Өфө дәүләт авиация техник университетында белем алырға теләүселәр араһында ла популяр: бер урынға 107 кеше. Шул уҡ ваҡытта был һөнәргә бушлай уҡыу мөмкинлеген бары тик 15 кеше генә аласаҡ: 10 урын - Өфө дәүләт авиация техник университетында һәм 5 урын Өфө иҡтисад һәм сервис академияһында. Абитуриенттар араһында ҙур һорау менән файҙаланған тағы бер һөнәр - ул дәүләт һәм муниципаль идара итеүсе: Өфө дәүләт авиация техник университетында бер бюджет урынға 136 һәм Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис академияһында 133 кеше дәғүә итә, ләкин был һөнәр буйынса бары тик 10 ғына абитуриент студент исемен йөрөтөү хоҡуғын аласаҡ. Шулай уҡ "Ҡунаҡхана эше", "Иҡтисад" һәм "Эшҡыуарлыҡ-информатика" бүлектәренә лә ғаризалар бик күп бирелгән.

М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының һәм Башҡорт дәүләт университетының "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте" һәм "Татар теле һәм әҙәбиәте" факультеттары был юлы абитуриенттар араһында иң аҙ һорау менән файҙаланған. Бында бер бюджет урынға 1-2 абитуриент ҡына дәғүә итә. Шулай уҡ буласаҡ студенттар ғүмерҙәрен сәнғәт менән дә бәйләргә ашыҡмай - педагогия университетының "Һынлы сәнғәт һәм технологиялар" һәм "Сәнғәт белеме" бүлектәрендә бер урынға 2,4 абитуриент дәғүә итә.

Ошоғаса ҙур һорау менән файҙаланған хоҡуҡ белгесе һөнәренә эйә булырға теләүселәр һаны быйыл кәмегән. БДУ-ның Хоҡуҡ институтында 35 урынға 187 кеше дәғүә итә.

Өфө нефть техник университеты уҡырға инеүселәр өсөн иң ауыр юғары уҡыу йорттары исемлегендә. Был уҡыу йортонда студент булыу бәхетен алыу өсөн бер урынға 30-40 кешелек конкурс үтергә кәрәк буласаҡ.

ЙӨҘӨН КҮРЕП, ЙӨҘӨҢ ОЯЛМАҺЫН!

**Хәтеремдә, студент йылдарында башҡорт теле уҡытыусыһы, филология фәндәре докторы, профессор Ғәли Сәйетбатталов бер саҡ былай тигәйне: "Мин илебеҙҙәге телдәрҙе урмандарҙағы күп төрлө ағастар һәм болондарҙағы сәскәләр менән сағыштырам. Ағастар урмандарға йәм биргән, сәскәләр болондарҙы биҙәгән кеүек үк, илебеҙҙәге төрлө телдәр ҙә Ватаныбыҙға ҡот бирә. Бөтә ағастарҙы бергә ҡушып - имәнгә йәки ҡарағасҡа, төрлө сәскәләрҙе розаға йәки ыныйы сәскәһенә әүерелдереп булмаған һымаҡ, һәммә телдәрҙе лә бергә ҡушып, рус йә ҡаҙаҡ теленә әйләндереү мөмкин түгел".**

# НИҢӘ "МОНБЛАН",

## ә Ирәмәл түгел?

Үкенескә ҡаршы, ғалимдарыбыҙ туған телебеҙ тураһында күпме генә һөйләп, күпме генә яҙһа ла, һуңғы йылдарҙа башҡорт теленә элеккенән айырмалы иғтибар һүнә, һүрелә бара шикелле. Ул күренеш башҡорт телендә генә түгел, рус телендә лә күҙәтелә. Республикабыҙҙың баш ҡалаһы, башҡа ҡала һәм райондарға өлгө булырлыҡ Өфө урамдарына ғына күҙ һалайыҡ. Ҡайҙа ҡарама: урам бағаналарын, йорт, бина стеналарын, тәҙрәләрҙе өс-дүрт метрлыҡ рекламалар, шыҡһыҙ атамалы алтаҡталар баҫҡан. Рус йә башҡорт телдәрендә булһа, бер хәл, асыуың да ҡабармаҫ, күңелең дә ярһымаҫ ине. Юҡ бит, уларҙың күбеһе ябай кеше түгел, ғилемле лә аңламаҫ ете-ят сит телдә яҙылған, һүҙҙәренең мәғәнәһе лә - ташҡа үлсәйем. Әйткән һүҙемде раҫлар өсөн бер нисә генә миҫал килтермәксемен.

Ҡала округы хакимиәте ҡаршыһындағы ҡунаҡханаға иғтибар итегеҙ. Ул элек "Россия" исемен йөрөтә ине, хәҙер иһә "Азимут" булып киткән. Азимут - ғәрәп һүҙе, меридиан менән берәй планета аша үтә торған вертикаль яҫылыҡтар араһындағы мөйөштө аңлата. Быны тиғән "Россия"- "Рәсәй" атамаһынан ҡасып, был мөйөштөң кемгә кәрәге булды икән?

Ҡала хакимиәтенән йыраҡ түгел "Курсаҡ театры" туҡталышында "Туй дефилеһы салоны" бар. Дефиле - француз һүҙе, ҡалкыулыҡтар араһындағы тар юл, тарлауыҡ. Икенсе мәғәнәһе - тантаналы марш менән үтеү. Был мәғәнәһеҙлектән кеше түгел, тауыҡ та ятып көләсәк бит, ә беҙ һәр нәмәгә битараф булып эргәһенән тегеләй-былай йөрөй бирәбеҙ, ул һүҙгә иғтибар ҙа итмәйбеҙ. Сөнки беҙ үҙебеҙ наҙан.

Әй урамындағы "Монблан" дарыуханаһы ла алыҫтан ҡысҡырып тора. Францияһағы бейеклеге 4807 метрлыҡ был тау түбәһе Өфөгә ҡайҙан килеп сыҡты икән, тип аптырамаған ереңдән аптырап, һыуға артың менән барып төшкәнеңде, теге өйрәк һымаҡ, белмәй ҙә ҡалырһың. Улай бик бейек булаһың килһә, үҙебеҙҙә тауҙар бөткәнме ни? Йорт, бина стеналарындағы урам исемдәрен ҡаплап, "фалес", "салес", "Номос-банк", "Эльдорадо", "Колорадо" кеүек испан конкистадорҙары эҙләгән алтын районы, йә иһә баҡсаларҙы ҡороткан бөжәктәр "ебәргән" Америка Штаты атамаһын Өфө урамдарына килтереп тағырға кемдең намыҫы етте лә, уға кем рөхсәт итте һуң?

Минә ваҡытында байтаҡ сит илдәрҙә булырға тура килде. Ләкин Венгрияла ла, Чехословакияла ла, Бельгияла ла, Германияла ла, Польша һәм Афғанстанда ла русса яҙылған бер генә реклама ла, алтаҡта ла күрмәнем, сөнки улар юҡ һәм булмаясаҡ та. Беҙ, бахырҙар иһә, сит телдәрҙе тын менән һурып алғандай итәбеҙ, ҡәҙерләйбеҙ, уларға табынабыҙ, ялағайланабыҙ. Әҙәм аңламаҫлыҡ "Зела", "Эврен", "Аквамарин", "Бистро", "Монарх", "Билайн", "Уфа-лайн", "Маркет", "Супермаркет", "Ника","Макдональдс", "Иль де Ботэ", "Нью-Йорк стейк хаус" тигән теш һындырырлыҡ атамалы кафе, магазиндар менән Өфө тулған да баһа. Тиҙҙән ҡытай, япон, вьетнам, корея иероглифтары Өфөнө,










гүзәл республикабыҙҙың башҡа ҡала, райондарын баҫып алмаясаҡ тип кем гарантия бирә?

Артабан китәйек. Бынан 165 йыл элек, йәғни 1846 йылдың 30 августында, Ырымбурҙа башҡорттарҙан йыйылған иғәнә - хәләл көсө менән һалынған Каруанһарай асыла. Ул Рәсәй сиктәрен Көнсығыштан һаҡлаусы баш ғәскәрҙең йәшәү төйәге, губерна үҙәгенә төрлө килеп-китеүсе башҡорттарға үҙенә күрә ҡунаҡхана ролен үтәй. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында Өфөлә Ырымбур Каруанһарайына бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы булмаған "Гостиный двор" - "Ҡунаҡһарай" тигән комплекс ҡалҡып сыҡты. Әммә кемдәрҙеңдер "аҡыллы башы" менән уның баш атамаһына "Ҡунаҡһарай" тип түгел, "Каруанһарай" тигән исем тағылды. Башында аҙ ғына аҡылы булған кеше лә уның шыр хата икәнлеген аңлай, әммә уны төҙәтергә кәрәклеге тураһында әлегә тиклем бер кем дә ауыҙ асып һүҙ әйткәне юҡ. Өйрәнелгән, күрәһең.

Бынан байтаҡ йылдар элек Францияла "Француз теленең сафлығын яҡлау тураһында" закон ҡабул ителә һәм ул бөгөн дә көсөн юғалтмаған. Туған тел даирәһен бысратҡан гәйеплеләргә - халыҡ алдында үҙ телен ватып-емереп телмәр тотоусы етәксеме, телерадио дикторымы, хөкүмәт әһелеме - исемшәрифенә ҡарамай, 5 мең франк күләмендә штраф һалына икән. Ул ярҙам итмәһә, штраф күләме 20 меңгә еткерелә. Франция хөкүмәте эргәһендәге тел эштәре буйынса махсус комиссияға иһә тағы ла ҡатыраҡ саралар / хатта төрмәгә ябыу / ҡулланыу хоҡуғы бирелгән.

Бәгзе берәүҙәргә был һүҙҙәр ышанмаҫлыҡ уйҙырма булып тойолор. Нисек инде ул, телде белмәйһең, уны боҙаһың, бысратаһың тип, штраф сәпәргә, төрмәгә ултыртырға мөмкин? Фантастика! Әммә был факт. Телде боҙоусылар, уны нәжескә буяусылар беҙҙең республикала ла баштан ашҡан. Рәсәй һәм Башҡортостан телевидениеһының ҡайһы ғына каналын асмағыҙ, унда ауыҙҙарын йырып мыҫҡыллап "синема", "хит-парад", "хит-трек", "бомонд", "бройнрид", "блеф-клуб", "маскишоу" кеүек туҙға яҙмаған һүҙҙәр ҡаршылай. Улар "домино", "бербоут-чартер", "клиринг", "дебус", "брокер", "маркер", "маркетинг", "конверсия" кеүек ҡара битлек кейеп, банк системаһында, баҙар мөнәсәбәттәренең уртаһында ла ҡайнай, рус телен дә, уның аша башҡа милли телдәрҙе лә ҡара һаҙлыҡҡа батыра, бысраҡҡа буяй, халҡыбыҙҙың аңын, телен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен ағыулай, вата, емерә. Үтһә, берике быуын үтер һәм, әгәр беҙ бөгөн телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, матбуғатыбыҙҙы, телевидение һәм радионы тыныс юл менән эстән яулаусы сит ил "шымсылары"на кәртә ҡуймаһаҡ, "Башҡортостан халыҡтарының телдәре тураһында"ғы Законды тулы ҡеүәтендә ҡулланмаһаҡ,

башҡорт теле генә түгел, рус теле үҙе лә сафлығын, үҙ аллылығын юғалтасаҡ, ә был үҙ сиратында милләттең, халыҡтың тарҡалыуына, ете-ят телдәр тарафынан йотолоуына тура юл асасаҡ.

Беҙҙең мөхитебеҙгә, аңыбыҙға көндән-көн тәрәнерәк тамыр йәйгән ошо һәләкәттән нисек ҡотолорға һуң? Әле 1996 йылда уҡ Рәсәй Президенты Указы менән Президент эргәһендә рус теле буйынса (французлардан күреп тер инде) совет төҙөлгәйне. Ошондай уҡ совет һуңынан Татарстан Республикаһы Президенты эргәһендә лә ойошторолдо. Күптән түгел Рәсәй Хөкүмәте тарафынан 2011-2015 йылдарға "Рус теле" тигән махсус федераль программа ҡабул ителде. Ул ике этапта тормошҡа ашырыласаҡ. Тәүгеһе (2011-2012 йылдар) фәнни-методологик база булдырыу, Рәсәй халыҡтарының милләт-ара аралашыуы өсөн шарттар тыуҙырыуҙы, икенсеһе (2013-2015 йылдар) тәүге этаптағы бурыстарҙы ғәмәлдә ҡулланыу, рус теле дәреслектәрен һәм методик әсбаптарҙы күпләп сығарыу һәм таратыуҙы күҙ уңында тота. Шулай уҡ Рәсәй Президенты Указы менән 6 июнь, йәғни А.С.Пушкиндың тыуған көнө, Рус теле көнө тип иғлан ителде. Ул хәҙер йыл һайын үткәреләсәк.

**Тәҡдимем шул: Башҡортостан Республикаһы Президенты эргәһендә, Рәсәй һәм Татарстандағы һымаҡ, Башҡорт теле буйынса совет ойошторорға. Рәсәй Хөкүмәте Программаһына ярашлы, беҙҙә лә ошондай программа әҙерләргә һәм "Башҡорт теле көнө"н булдырырға.** Тик шул саҡта ғына, минең ҡарашымса, беҙгә ете-ят телдәр килеп йоғонмаясаҡ, аяҡ аҫтында буталмаясаҡ, "Монблан"дар, "Нью-Йорк стейк хаус"тар, "Эльдорадо"лар, "Макдональдс"тар урамдарыбыҙҙан юғаласаҡ.

**Тағы ла бер фекер.** Әле Октябрь революцияһына тиклем үк рус булмаған халыҡтар менән эш иткән батша чиновниктары шул халыҡтың телен мотлаҡ белергә тейеш булған. Әлбиттә, бында аҫтыртын сәйәсәт тә ятҡан, күрәһең. Бының асыҡ миҫалы - Рәсәй Фәндәр академияһының беренсе мөхбир-ағзаһы, географ һәм тарихсы Петр Рычков, Ырымбур губернаторы Василий Перовский, тел ғалимы, "Рус теленең аңлатмалы һүҙлеге"нең тәүге авторы Владимир Даль, мәҫәлән, башҡорт, татар, ҡаҙаҡ телдәрендә еңел аңлашҡан. Бөгөн иһә район башлыҡтарынан алып республика министрҙарына тиклем төрлө кимәлдәге етәкселәр туған телдәрен дә, рус телен дә йүнләп белмәй, тиһәм, һис тә хаталанмам.

Үҙҙәре иһә бер генә рус кешеһе булмаған аудиторияла белер-белмәҫ көйө русса һөйләшеп маташа. Уларҙың тел мәҙәниәте бик түбән, лексиконы үтә ярлы. Ул ғына ла түгел, вазифа яғынан үҙҙәренән түбәнерәк кешеләр менән "мат"ҡа һалдырып һөйләшеүҙән дә тартынмайҙар. Бер йыл минә район башлыҡтарының береһе менән Өфөгә барырға тура килгәйне. Ул үҙе менән ҡатынын да алғайны. Оҙон юл буйы улар тик "мат" менән генә һөйләшеп килде. Юҡ, улар үҙ-ара талашманы, ә тыныс ҡына һөйләште, ә минең ҡолаҡтарым ҡыҙарып бөттө, шофер ҙа оятынан ни эшләргә белмәне. Вәт, әҙәп, эй!

**Минеңсә, "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законға таянып, ошондай "хужа"ларҙың телдәрен бер килке "игәп" алырға ине. Бының өсөн Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан Республикаһы Дәүләт хеҙмәте һәм идараһы академияһында башҡорт телен уҡытыуҙы индерергә тәҡдим итер инем.**

**Ризван ХАЖИЕВ,**
**журналист һәм яҙыусы.**

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*



# БАШҠОРТ ТАРХАНДАРЫ ҺӘМ ДВОРЯНДАРЫ

**Борон башҡорт йәмғиәтенең юғары ҡатламында тарханлыҡ институты шулай уҡ ҙур урын тотҡан. Тарханлыҡ хан замандарынан килгән күренеш. Хан, солтан, бейҙәрҙән ҡала тархан дәрәжәһе иң аҫыл исем һәм ишлерәк булған, буғай. Тарихтан күренеүенсә, тарханлыҡ Төрки ҡағанаты дәүерҙәренә барып тоташа. Боронғо монголдарҙа ла ул исем-ат бар. Хазар ҡағанатында документтарҙан Гөрбән тархан исеме билдәле. Византия императоры һәм тарихсыһы Константин Багрянородный Олуғ Тархан титулы хаҡында яҙған.**

Һәр хәлдә, тархан титулы борон монгол-төркиҙәрҙә юғары хакимиәт эйәһе дәрәжәһен аңлатҡан булһа кәрәк. Монгол телендә таркан (тархан) һүҙе олуғ тархан мәғәнәһен аңлата. Мәхмүт Ҡашғариҙың "Диуани лөғәт әт-төрки" (XI быуат) һүҙлегендә алп тархан һүҙе хакимиәт башлығы төшөнсәһен бирә. Сыңғыҙ хан заманында тархандар аҫыл аҡһөйәктәр ҡатламын тәшкил иткән. Шул яҡтан Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың тарханды татар ханы тоҡомо тип аңлатыуында ла хаҡлыҡ бар.

Хәҙерге ваҡытта тархан атамаһының бер нисә мәғәнәһен айырып ҡарарға мөмкин:

1. Тархан - төрки-монгол халыҡтары тарихында юғары аҫыл зат дәрәжәһе исеме, хакимлыҡ титулы;

2. Урта Азия, Кавказ халыҡтары, Ҡаҙан, Әстерхан, Ҡырым ханлыҡтары тарихында - дәүләт һалымдары һалынмаған социаль ҡатлам;

3. Рәсәйҙә льготалы ярлыҡтар (грамоталар) исеме. "Башҡорт теленең һүҙлеге" тарханға "ырыуҙаштары араһында өҫтөнлөк менән файҙаланып, яһаҡ түләүҙән ҡотҡарылған юғары ҡатлам кешеһе һәм шул кешенең нәҫелдән нәҫелгә күсә торған дәрәжә исеме", - тип, беҙҙең шарттарға бәйле рәүештә аныҡыраҡ итеп аңлатма бирә. Төрки ҡағанаттары, Хазар ҡағанлығы традицияларына бағлы рәүештә, Кавказ алды Бөйөк Болгария дәүләтендә тарханлыҡ титулы йәшәгәнлеге мәғлүм. Ул Волга буйы Болгария дәүләтенә лә күсә. Ғәйнә башҡорттары легендаларында үҙҙәрен Болгариянан күсеп килгән тархан дәрәжәле ырыуҙар тип иҫәпләйҙәр.

Этнограф Рим Янғужин Башҡортостанға тарханлыҡ институты татар-монголдар тарафынан индерелгән тип ҡарай. Унынса, ысынлап та, Сыңғыҙ хан, Батый хан яуҙарынан һуң айырыуса Алтын Урҙа ханлығы дәүерҙәрендә Башҡортостанда ла тарханлыҡ ныҡлы тамыр ебәргән булырға тейеш. Легендалар, шәжәрәләр һөйләүенсә, башҡорт ырыу башҡорттарының, атаҡлы аҡһаҡалдарының байтағы бейлек, тарханлыҡ дәрәжәләре алған, уларға өҫтәмә льготалар бирелгән. Яһаҡ-һалымдарҙан ҡотҡарылғандар.

Рәсәй дәүләтенә ҡушылғас та башҡорттарҙың юғары ҡатламы тарханлыҡ дәрәжәләрен һаҡлаған. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, башҡорт ырыу башлыҡтары урыҫ аҡ батшаһына үҙ ихтыярҙары менән баш һалырға барғанда тәхет эйәһе исеменән үҙ ерҙәрен үҙҙәре биләмәгә ярлыҡтар яҙҙырып алғандар, тарханлыҡ, бейлек дәрәжәләрен яңырттырғандар. Мәҫәлән, бөрйән, ҡыпсаҡ, үҫәргән һәм тамъян ырыуҙары шәжәрәһендә яҙылыуынса, "үҫәргән ырыуынан Бикбау кенәз, бөрйән ырыуынан Иҫке бей кенәз, ҡыпсаҡ ырыуынан мишәүле Ҡарағужаҡ кенәз, тамъяндан Шәғәли кенәз - мәҙкүр дүрт бейҙәр Ҡаҙан шәһәренә барып, Иван Грозныйға мәғлүм булдылар. Ҡайдыр башҡорт йәмәғәттәренә ихлас хеҙмәт итеүҙәре менән ҡабул итеп, рәғиәтлеккә (дәүләт халҡы итеп) алғандан һуң тарханлыҡ дәрәжәләрен ҡәрәм (хөрмәт) итеп, үҙҙәренә наград итеп грамота илә ерҙәрен вә һыуҙарын үлсәтеп бирмәклеккә илтимас илә ғариза ҡылдылар" ("Башкирские шежере". Уфа, I960, 71-се бит).

Тарханлыҡ дәрәжәһе ырыу башлыҡтарына түрәлек хоҡуғын да биргән. Уларҙың күбеһе ырыуҙарының башлығы булып хеҙмәт иткән, күп кенә льготаларҙан файҙаланған. Тарханлыҡ дәрәжәһе нәҫелдән нәҫелгә күскән. Тархандар аҡ батшаның урындағы таяныстары булып, уға тоғролоҡ һаҡлаған. Һуғышфәлән сығып китһә, Рәсәйҙе яҡлап яуға күтәрелгән, ырыуҙаштарынан атлылар отрядтарын туплаған, сик буйы һаҡтары хеҙмәтен үтәшкән.

Уҡымышлы башҡорт тархандарын батша хөкүмәте ил, халыҡ-ара дипломатик бәйләнештәрҙә лә файҙаланған. Рәсәй өсөн яуҙарҙа ҡаһарманлыҡ күрһәткән батырҙарға, дипломатия өлкәһендә үҙҙәрен танытҡан илселәргә, ғөмүмән, ил алдындағы күренекле хеҙмәттәре өсөн ил ағаһы булырҙай башҡорттарға ла тора-бара шәхси тарханлыҡ дәрәжәләре бирелер булған. Мәҫәлән, рус көнсығыш белгесе В. В. Вельяминов-Зерновтың "Источники для изучения тарханства, жалованного башкирам русскими государями" тигән хеҙмәтенән күренеүенсә лә, XVI-XVIII быуаттарҙа Рәсәйҙе яҡлап төрлө һуғыштарҙа, хәрби походтарҙа ҡатнашып батырлыҡтар күрһәткән башҡорттарға тархан исеме бирелеүенең ишәйә барғаны, был һандың йөҙәрләп иҫәпләнгәне күҙәтелә. "Тарханы или служилые башкиры в царстве царя Ивана Васильевича многие службы показывали при взятии Казани и бывали с русскими войсками в походах лифляндских... - тип яҙа В. В. Вельяминов-Зернов. - Многие тарханы получили эти звания за героизм в Крымском, Азовском походах" (Приложение к 4-му тому "Записок императорской Академии наук", № 6, Спб., 1864, 9, 20-се биттәр).

Бына был хеҙмәттән тағы бер нисә күсермә: "В тарханство в 1777 г. по донесению Уфимской провинциальной канцелярии в 1768 г. записаны:

Указы из канцелярии Оренбургской экспедиции Уфимскому уезду тарханам и башкирам 1734 г. 24 декабря Ногайской дороги Бурзянской волости:

1. Тархану Алдарбаю Исекееву, детям его, племянникам и внучатам - за бытие им Алдаром в Крымском и Азовском походах, и за три полученные им раны, также и за убийство сразившего с ним черкашинина, за поимку языка крымчанина и объявление Его Величеству блаженной и вечные славы достойных памяти государю императору Петру Первому".

Тарихсы Ирек Аҡманов иҫәпләп сығарған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, XVII быуатта башҡорттар араһынан 155 кеше тархан дәрәжәһен алған.

XVIII быуатта тарханлыҡ исемен биреү һәм уларҙы теркәү билдәле бер юлға һалынған. 1734 йылда Хөкүмәт Сенаты указы менән тархандарҙы иҫәпкә алыуҙың һәм теркәүҙең Өфө канцелярияһында яңы тарханлыҡ кенәгәһе булдырылған. Бында иһә кемдең ҡасан, ни өсөн тарханлыҡ исеме алыуы, уның башҡарған хеҙмәттәре тураһында мәғлүмәттәр яҙылған. Ошо кенәгә буйынса һәм тарханлыҡ грамоталарына ҡарағанда, Өфө воеводалығында 773 кешенең тархан икәнлеге күренә. Был сағыштырмаса ҙур һан, әлбиттә. Күрәһең, XVIII быуатта, башҡорт ихтилалдары ҡыҙған заманда, батша яҡлы тоғро башҡорт түрәләренә тархан исемен биреү, улар ярҙамында халыҡ яуын тиҙерәк баҫтырыу маҡсаты арҡаһында был һан ныҡ артҡандыр. 1760-1765 йылдарҙағы мәғлүмәттәр башҡорт тархандарының 636 -654 тирәһендә тирбәлеүен һөйләй. Ә 1767 йылда Өфө һәм Исәт провинцияларында 443 тархан йорт-ғаиләләре барлығы теркәлгән. 1770-1771 йылдарҙа Өфө канцелярияһы ведомосында тархан йорттарының (двор) 344-кә төшкәнлеге күренә. Игенселек кәсебе артҡан Ҡаҙан, Уса, Себер юлдарында тархандар һаны кәмегәнлеге күҙәтелә.

Башҡорт тархандары һанының XVIII быуаттың икенсе яртыһында кәмей барыуы батша хөкүмәтенең 1754 йылда дөйөм һалымды бөтөрөп, тоҙҙо ҡаҙнанан һатып алыу хаҡында сығарған указына ла ныҡ бәйле, ахырыһы. Сөнки был указ башҡорт, мишәр тархандары менән түбән ҡатлам халыҡ хоҡуҡтарын тиңләй. Һалым бөтөрөлгәс, льготаның кәрәге лә бөтә. Быны тоҙҙо һатып алыу "һалымы" алыштыра. Ә тоҙ өсөн тархандар ҙа ситләтелгән һалым түләргә мәжбүрҙәр. Был хәл тарханлыҡ исеменең дәрәжәһен төшөрә, социаль асылын юя.

Әлбиттә, быға ҡарап ҡына тарханлыҡ ҡапыл ғына һүнеп ҡалмай әле, традиция буйынса йәшәүен, исем-атын дауам итә. Күп кенә тархандар сауҙа эшенә бирелә, бында уларға ҡайһы бер өҫтөнлөктәр һаҡлана, килем-төшөм дә аҙ түгел.

Әммә дәрәжәле әҙәмдәргә, тархан заттарға береһе бөтһә, икенсеһе сығырға әҙер. XVIII быуат аҙағында башҡорттар кантонлыҡ системаһына күсерелә, ярым хәрби сословиеға әйләндерелә. Кисәге тархандарҙың абруйлыраҡтары кантон башлыҡтары булып китә, ҙур хоҡуҡлы яңы түрәләргә әүерелә. Күп тархандар офицерлыҡ дәрәжәләренә ынтыла. Өлкәнерәктәре, ил алдында ҙур хеҙмәт күрһәткәндәре урыҫ дворяндарына тиңләшер дворянлыҡ дәрәжәһен даулай башлай. Етмәһә, батша хөкүмәте 1845 йылғы ҡарары менән тархандарҙы барлыюҡлы хоҡуҡтарын да мәхрүм итеп, ябай халыҡ кимәленә төшөрөп ҡуя. Был йәнә ризаһыҙлыҡты көсәйтә.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,**
**яҙыусы, профессор.**
**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Бөгөн үҫәргәндәрҙең яртыһы Ейәнсура районында, 20 проценты самаһы Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ, Һарыҡташ, Гай районадарында, бер өлөшө Йылайырҙа, ҡалғандары Хәйбуллала.***



**"Кеше булыр кешенең кешелә булыр эше, кеше булмаҫ кешенең кешелә ни эше" тигән һүҙҙәрҙе әйткәндә, әлбиттә, донъяға, заманға, үҙ иленең, тыуған еренең, милләтенең яҙмышына битараф булмаған фиҙаҡәр заттар күҙ алдына баҫа. Эйе, ундайҙар ниндәй генә заманда йәшәһә лә, ниндәй генә шарттарҙа ла, үҙ һүҙен, хәҡиҡәтте ҡурҡмайынса әйтә беләләр. Ана шундай заттарҙың береһе ул Хәйбулла районының Аҡъяр ауылында йәшәүсе СССР-ҙың мәғариф отличнигы, уҡытыусы-методист, Сергей Чекмарев исемендәге премия лауреаты, Башҡортостан Республикаһы, Рәсәй Федерацияһы Журналистар союзы ағзаһы, крайҙы өйрәнеүсе Рәшит Насиров. Әлеге ваҡытта пенсияла булыуына ҡарамаҫтан, ул туҡтауһыҙ эшләй, тыуған яғының тарихын өйрәнеп, китаптар яҙа, бер һүҙ менән әйткәндә, әүҙем тормош менән йәшәй. Беҙҙең "Киске Өфө" гәзите трибунаһы аша уҡыусыларыбыҙға үҙ фекерҙәрен еткереү мөмкинлеген дә ул ҙур ихласлыҡ менән ҡабул итте. Һүҙ - Рәшит Ғимат улы Насировҡа.**

# XXI БЫУАТ урыҫтар Пушкинын



## Дөрөҫ йүнәлеш

Бала сағым бик ауыр шарттарҙа үтһә лә, ул мәлдәремде һағындыра. Ҡартатайым Бикбов Исхаҡ Йәғәфәр улы Зәки Вәлидов етәкләгән милли хәрәкәттә йөрөгән, ике революцияла ҡатнашҡан. Ул 20-се йылдарҙа Йылайыр кантонында промартель менән етәкселек иткән. Мин 1937 йылда биш кенә йәшлек сағымда атайһыҙ ҡалдым. Атайым уҡытыусы ине. Һеңлекәшем дә вафат булды. Әсәйем Аҡъюл ауылы кешеһенә кейәүгә сыҡҡас, апайым менән әсәйебеҙгә эйәреп, тыуған ауылыбыҙ Ибраһимдан Аҡъюлға күсеп барҙыҡ. Мине 12 йәшемдә хат ташыусы итеп тәғәйенләп ҡуйҙылар, Ғәлиәхмәттән Аҡъюлға ат менән почта ташыным. Унан һуң беҙҙең яҡта берҙән-бер телефонлы Йәнтеш ауылына колхозыбыҙҙа барған эштәр хаҡында сводка-мәғлүмәт килтереү ҙә минең елкәлә булды. Ул саҡта беҙҙең Аҡъюл ауыл советына ҡараған 5 колхоздан Йәнтешкә сводка ташый торғайнылар.

Уҡырға ынтылыу теләге мине ете класты тамамлағандан һуң Темәскә юлландырҙы. Уҡыуы ауыр булды, аҡса юҡ. Шуға күрә Магнитогорск ҡалаһының тимер юл училищеһына киттем. Унда машинист ярҙамсыһына уҡып сыҡтым. Әммә ун алты йәшем тулмағас, мине бер ергә лә эшкә алманылар. Эшһеҙ көйө төрлө урындарҙа йомошсо малай булып йүгереп кенә йөрөй инем, аҡыллы бер ағай "Һин прокуратураға барып, миңә эш бирмәйҙәр, тип әйт", - тип өйрәтте. Прокуратураға барып, хәлемде аңлатҡайным, миңә документтарымды алып, ҡаланан сығып китергә рөхсәт иттеләр. Миңә шул ғына кәрәк ине, сөнки ФЗО-ны тамамлағандан һуң бер ерҙә лә эшләмәгәндәрҙе төрмәгә бикләйҙәр ине.

Шунан Өфөгә сығып киттем. Республика мәктәп-интернаты ул сағында Красин урамында урынлашҡайны. Мин унда уҡый башлағанда Рәми Ғариповтар мәктәп-интернатты тамамлап йөрөй ине. Артабан Тимерязев исемендәге педагогия институтына уҡырға инеп киттем. Уҡыу миңә бик еңел бирелде. Ғөмүмән, Магниторгорскиҙан Өфөгә барыуымды тормошомдоң дөрөҫ йүнәлеше итеп билдәләйем. Әгәр ҙә ваҡытында миңә дөрөҫ кәңәш биреүсе булмаһа, яҙмышым бөтөнләй икенсе яҡҡа боролоуы ла мөмкин ине. Институтты бөткәс, Аҡъяр мәктәбенә директор булып ҡайттым. Төрлө йәмәғәт эштәрендә ҡатнаштым.

## Самаһыҙ ихласбыҙ шул…

1961 йылда Урал аръяғының өс районы базаһында төҙөлгән бейеү ансамблендә лә ҡатнашып йөрөргә тура килде миңә. Әле миңә баймаҡтар хат яҙҙы. Улар бейеү сәнғәте хаҡында яҙып сығыуымды үтенә. Дамир Аҡназаров "Атайсал" гәзитендә лә бейеү сәнғәтенең яҙмышы өсөн борсолоп яҙып сыҡҡан. Әйткәндәй, хәҙер бейеүҙәребеҙ үҙгәрә, үҙенең милли төҫөн юя бара. Хәҙер башҡортҡа хас булмағанса ырғып-ырғып бейей йәштәр. Беҙ бар нәмәне хуплап, ҡул сабып ултырып, көндәлек тормошобоҙҙа барған күп кенә үҙгәрештәргә иғтибар ҙа итмәй йәшәнек, һөҙөмтәлә асылыбыҙҙы юғалта яҙғанбыҙ шул.

Йырҙарыбыҙ ҙа үҙгәрә. Берике йыр яҙған кешеләрҙе композитор тип атайбыҙ. "Композиторҙар" үҙҙәре яҙған йырҙарҙы сәхнәлә үҙҙәре үк башҡара. Уларға ла ҡул сабабыҙ һәм шулай әкренләп кенә асылыбыҙҙы үҙгәртәбеҙ.

Үткән быуаттың 90-сы йылдарында республикабыҙ үҙаллылығы өсөн көрәштек. Мин ул саҡта үҙебеҙҙең райондың "Аманат" башҡорт халыҡ ойошмаһының рәйес урынбаҫары булдым. Ул сағында беҙ: "Республикабыҙға үҙаллылыҡ яулайбыҙ, халҡыбыҙ үҫешенә шарттар тыуҙырыр өсөн дәүләтселегебеҙҙе нығытабыҙ", - тигән маҡсаттан сығып эш иттек. Ирешкән уңыштарыбыҙға һөйөндөк, ҡыуандыҡ, маҡтандыҡ. Тик, нишләптер, беҙ күҙ төбәгән ағайҙар был көрәштән ситләшә башланы. Күрәһең, уларға ҙур капиталдың йоғонтоһо көслө булғандыр. Ҡайҙандыр олигархтар барлыҡҡа килде. Улар хаҡында хатта Владимир Ленин: "Олигархтар банк капиталы менән сәнәғәт капиталы берләшеүҙән барлыҡҡа килә", - тип иҫкәрткән. Беҙ, Рәсәйҙең аҙ һанлы халыҡтары суверенитет мәсьәләһендә шулай "тишек кәмәгә" ултырҙыҡ. Хәҙер миңә райондаштарым: "Һин беҙҙе, Рәшит ағай, юҡ нәмә өсөн ҡотортоп йөрөгәнһең. Нисәмә тапҡыр Өфөгә барыуыбыҙ, митингыларҙа ҡатнашыуыбыҙ бушҡа булған икән", - тиҙәр. Мәрхүм аҙашым, күренекле яҙыусы Рәшит Солтангәрәевтың "Татар менән башҡорт" тигән хикәйәһен уҡыйым да, 90-сы йылдарҙы һағынам. Хикәйәләге башҡорт кешеһе образы беҙҙең тотош Хәйбулла районы халҡы һымаҡ тойола миңә. Шул тиклем бер ҡатлы булғанбыҙ, ә шул сифатыбыҙҙы олигархтар ана нисек файҙаланды. Беҙ йырланыҡ, бейенек, ә улар беҙҙең байлыҡты күҙ менән ҡаш араһында үҙләштерҙе.

Беҙҙең халыҡ законға күндәм халыҡ. Беҙ ышанабыҙ. Хрущев кәзәләрҙе бөтөрөргә ҡушҡас, иң беренселәрҙән булып беҙҙекеләр кәзә малын юҡ итте. Ә бына беҙгә күрше генә ятҡан ырымбурҙар кәзәләрен бөтөрөргә ашыҡманы. Беҙҙә иһә, бәләкәй калибрлы мылтыҡ алып, тау-таш араһына ҡасҡан кәзәләрҙе баҫтырып атып йөрөнөләр. Беҙ олигархтар күрергә теләгәнсә, бер ҡатлы халыҡ та түгел, бары тик самаһыҙ ихлас булыуыбыҙ ғына ошондай ҡырағай заманда шундай сағылыш тапты.

Глобалләшеүҙе һәр кем үҙенсә аңлай. Мин, мәҫәлән, Аҡъяр урамына сыҡһам, унда тулып йөрөгән сит ил маркалы машиналарҙы күрәм. Был үҙенә күрә техника өлкәһендәге глобалләшеү күренеше. Өфө ҡалаһы урамдары сит телдәге яҙыуҙар менән сыбарланған. Был да шул уҡ глобалләшеү күренеше. Киләсәктә фән, техника, сәнәғәт өлкәһендә үҙ телен, үҙ мәҙәниәтен сағылдыра алған милләттәр һәм дәүләттәр глобалләшеүгә бирешмәйәсәк.

Ҡайһы саҡ үҙебеҙҙең хәлгә ҡарап, аптырап ҡуям. Минең бер уҡыусым хәҙерге ваҡытта Италияла бер ханымдың хеҙмәтсеһе булып эшләй, уның донъяһын, йортон ҡарай. Ул ханым пенсияла булыуына ҡарамаҫтан, санаторийҙарҙа ял итә, донъя ҡыҙыра. Ә бына беҙҙең ил пенсионерҙарының йәшәү кимәле ниндәй һуң? Әлбиттә, сағыштырырлыҡ та түгел. Беҙҙең тормош кимәле булмышыбыҙҙы, аңыбыҙҙы баҫа. Бөгөн, мәҫәлән, нефтле Башҡортостанда бензин бик ҡиммәт. Коммуналь өлкәлә реформа башланғандан бирле халыҡты талау бара. Бына минең 42 йыл педагогик стажым бар. Льготаларым бар көйөнә фатир өсөн Аҡъярҙа айлыҡ түләү хаҡы 2 мең тирәһе килеп сыға. Ә льготаһы булмаған кешеләр нимә эшләргә тейеш һуң?

> ***Ҡайһы саҡ үҙебеҙҙең хәлгә ҡарап, аптырап ҡуям. Минең бер уҡыусым хәҙерге ваҡытта Италияла бер ханымдың хеҙмәтсеһе булып эшләй, уның донъяһын, йортон ҡарай. Ул ханым пенсияла булыуына ҡарамаҫтан, санаторийҙарҙа ял итә, донъя ҡыҙыра. Ә бына беҙҙең ил пенсионерҙарының йәшәү кимәле ниндәй һуң? Әлбиттә, сағыштырырлыҡ та түгел. Беҙҙең тормош кимәле булмышыбыҙҙы, аңыбыҙҙы баҫа. Бөгөн, мәҫәлән, нефтле Башҡортостанда бензин бик ҡиммәт. Коммуналь өлкәлә реформа башланғандан бирле халыҡты талау бара. Бына минең 42 йыл педагогик стажым бар. Льготаларым бар көйөнә фатир өсөн Аҡъярҙа айлыҡ түләү хаҡы 2 мең тирәһе килеп сыға. Ә льготаһы булмаған кешеләр нимә эшләргә тейеш һуң?***

## Бүленмәйек…

Минең тыуған ауылымдан Баһауетдин атлы ир-уҙаман рус-япон һуғышында ҡатнашып, ҙур ғына батырлыҡтар яһаған. Уны күрһәткән батырлыҡтары өсөн ике "Георгий тәреһе" миҙалы менән бүләкләйҙәр. Һуғыштан ҡайтып килгәндә уны Ырымбур губернаторы поездан төшөрөп алып ҡалып ҡунаҡ иткән. Ырымбур ҡалаһы беҙҙең ауылға 120 саҡрым тирәһе барҙыр. Губернатор Баһауетдинды ҡәҙер итеп һыйлағандан һуң көймәгә ат мисәп ектереп, ике һыбай биреп, тыуған ауылына тиклем оҙаттырған. Ибраһимдың батыр исеме алып ҡайтып килеүе хаҡындағы хәбәр тыуған ауылыбыҙға алдан уҡ килеп етә. Ауылыбыҙ янындағы ҙур тау итәгенән оло юл да күренеп ята. Ауыл ҡарттары уның ҡайтып еткәнен көтөп, мәсет алдында ултыра икән. Бына бер мәл ми-сәүле ат ауылға килеп ингән. Баһауетдин ауылдаштары менән күрешеп сыҡҡан да: "Ағай-эне, йәмәғәт, әгәр ҙә имен-һау ауылыма ҡайтып етер булһам, иң башта ауылыбыҙ мәсетенә инеп, әруахтар рухына аят уҡытырмын, хәйер-саҙаҡа өләшермен тигән әйтеүем бар ине. Шуға күрә быны үтәргә рөхсәт итегеҙ",- тигән. Ауылдаштары уға: "Беҙ был теләгеңә ҡушҡуллап риза. Тик түшеңдәге тәреләреңде ысҡындырып, бына бында һал, шунан һуң ғына мәсеткә рәхим ит",- тип яуап ҡайтарған. Әлбиттә, Баһауетдин батыр ауыл ҡарттарының һүҙенә ҡаршы килә алмаған, түшендәге тәреләрен һалып, мәсеткә үткән. Беҙҙең яҡта "Порт Артур" йырын "Баһауетдин йыры" тип йырланылар. Әле булһын шулай йырлайҙар.

Баһауетдиндың тәреләрен һалып мәсеткә инеп аят уҡытыуы, хәйер өләшеүе нимә хаҡында һөйләй һуң? Элек ауыл ҡарттарының абруйы шул тиклем көслө булған, ҡыҫҡаһы, уларҙың ихтыярына ҡаршы ҡаршы килә алмаған. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, башҡорт йәмғиәте бик көслө булып, халыҡ яҙмышының ҡырҡыу мәлендә ул йәмғиәт халыҡтың төп таянысына әүерелгән. Халыҡ ҡабул иткән дөйөм фекерҙе һәр кем үҙенеке итеп ҡабул иткән һәм ул ҡарарға һис бер тайпылышһыҙ буйһонған. Ул саҡта, бәлки, ҡайһы бер ауылдаштарыбыҙ Ислам диненең ғәрәп илдәренән таралғанын да белмәгәндер, әммә уны үҙенең дине итеп ҡабул иткән. Беҙҙең ауылда тәртип һаҡланған. Ауылдаштарым әллә ниндәй ҙур идеология менән йәшәмәһә лә, йәшәү рәүеше улар өсөн төп идеология булған. Хәҙерге ваҡытта ла дин кешегә тыйылмай, йәне теләгән кеше намаҙ ҙа уҡый ала, ураҙа ла тота, мәсеткә лә йөрөй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, тәртип элекке һымаҡ түгел. Бының сәбәбе - берҙәм фекерле була белмәүҙә. Йәштәр аҡыллы, күп белә, күп йөрөй, әммә һәр кем үҙенең фекерен әйтеүҙе шәхес азатлығы тип атап, үҙенең ҡандаш туғанынан айырыла, ситләшә. Беҙ берҙәм халыҡ хәрәкәтен дә бер нисәүгә бүлгеләп ташланыҡ. Минеңсә, халыҡ ойошмаһы берәү һәм берәгәй булырға тейеш. Башҡортостанды районадарға бүлгән саҡта уҡ беҙҙе бүлгеләй башланылар. Бөгөн үҫәргәндәрҙең яртыһы Ейәнсура районында, 20 проценты самаһы Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ, Һарыҡташ, Гай районадарында, бер өлөшө Йылайырҙа, ҡалғандары Хәйбуллала. Илебеҙ административ яҡтан айырым өлөшсәләргә бүленеп нығынған нығыныуға, әммә был хәл халҡыбыҙҙы эске яҡтан

тарҡаткан. Беҙгә хәҙер милләтебеҙ зыялыларының төрлө йүнәлештәге йәмәғәт ойошмаларынан ҡотолоп, иң күбендә ике ижтимағи ойошма төҙөү ҙә етер ине. Әйтәйек, Башҡорт йәштәре ойошмаһы һәм Аҡһаҡалдар ҡоро. Беҙ тарҡаулығыбыҙ арҡаһында милли проблемаларыбыҙҙы хатта Дәүләт Думаһы трибунаһы кимәлендә лә күтәрә алмайбыҙ.

Дингә килгәндә, беҙҙең ата-олатайҙар бер ваҡытта ла экстремизмға бармаған, үҙ асылына та тап килгән тәриҡәтте генә ҡабул иткән. Бөгөн иһә йәштәр ниндәйҙер секталарға бүленә. Улар дини өлкәлә үҙҙәрен бик "белемле" һанай һәм уларҙы нимәгәләр инандырыуы мөмкин түгел. Күршеләребеҙ "Ислам милләте" тигән терминды индермәксе. Ундай милләт юҡ. Бар башҡорт милләте, бар урыҫ милләте, бар татар милләте, бар сыуаш, мари милләттәре. Бер диндәге кешеләр бер ваҡытта ла бер милләтте тәшкил итә алмай. Ислам милләте шул уҡ панисламизм күренеше ул.

ның һөҙөмтәһе булып тора. Столыпин башлаған реформа хәҙер ҙә үҙенсәлекле рәүештә дауам итә. Мәҫәлән, Әбйәлил районы ауылдарының ҡайһы бер кешеләре йорттарын ситтәргә һата. Ә ситтән килеүселәргә уның йорто түгел, ә урыны, ере кәрәк. Ошо юл менән беҙҙең этник яҡтан таҙа булған башҡорт мөхитенә сит тел, сит мәҙәниәт, сит йоғонто килеп инә һәм тәьҫир итә. Был үҙенә күрә глобалләшеүҙең иҡтисади юлы. Беҙ бөгөн үҙебеҙҙең милли аңыбыҙ менән ил сәйәсәтен үҙгәртә алмаһаҡ та, үҙебеҙҙең йәшәү кимәлен яҡшырта алабыҙ. Әгәр ҙә ситтән килеүселәрҙең һаны артып китһә, беҙ йотола башлаясаҡбыҙ. Шуға күрә бында аҙ һанлы милләттәрҙе ҡурсалау йәһәтенән дәүләт кимәлендә ниндәйҙер закон йә акт ҡабул ителергә тейеш.

### Эшһеҙлек касафаты

Мин үҙемдең ҡорҙаштар, өлкәндәр менән һөйләшеп ултырғанда һуғышҡа тиклем тормоштоң арыулана башлауын,

була ине. Хосусилаштырыуҙы ябай халыҡ аңлап та өлгөрмәне, иң йылғырҙар алдан өлгөрөп, ил байлығын ҡулға төшөрҙө. Был хәлдең һөҙөмтәһен бөгөн күрәбеҙ инде. Бөгөн илебеҙ халҡы алдындағы иң ҙур проблема - эшһеҙлек. Әгәр ҙә кешенең эше булһа, хеҙмәт режимы кешене тәртипкә өйрәтә. Эше булған кешенең буш ваҡыты ла, эсеп йә башҡа төрлө ҡырын эштәр атҡарып йөрөргә ваҡыты ла ҡалмай. Ҡыҫҡаһы, илебеҙҙә барлыҡҡа килгән бик күп һандағы кире күренештәрҙең тамырында эшһеҙлек ята.

### Ялҡаулыҡ психологияһы

Һүҙ юҡ, колхоз-совхоздар илебеҙ һәм беҙҙең милләт тормошонда прогрессив хужалыҡ итеү юлы булды. Хужалыҡ итеүҙең был формаһы һис һүҙһеҙ ауыл кешеһен эшле, ашлы итте, уға унай тормош шарты булдырҙы. Колхоз-совхоздарҙың ошондай барлыҡ ыңғай яҡтары менән бергә ауыл халҡы

кән һәм бер ваҡытта ла эшһеҙ һәм ашһыҙ ултырмаған. Тормош хәҙер башҡортто ғына түгел, урыҫты ла, башҡаларҙы ла көрсөккә килтереп еткерҙе. Тормош барыбыҙҙы ла тигеҙләне. Әлбиттә, эшләмәй ятыусылар революцияға тиклем дә булған: ерһеҙҙәр - ерлегә, малһыҙҙар - маллыға, ярлылар байҙарға ялланып көн күргән.

Бөгөн ауыл хужалығы ни өсөн урынынан ҡуҙғалып китә алмай? Сөнки ундағы эш шарты, етештереү процесы күмәк көстә талап итә. Бер кеше үҙе генә иген сәсеп илде туйҙыра алмаясаҡ. Үҙ эшен асыусылар, фермерҙар, эшҡыуарҙар эшкә ялыныусыларҙы алдарға әҙер тора, хеҙмәт хаҡын түләмәйҙәр. Элек байҙар үҙҙәренә хеҙмәтсе алған ваҡытта иң тәүҙә уны ашатып ҡараған, тип һөйләйҙәр. Ашағанда ҡолағы һелкенеп ултырған кешене эшкә алғандар, ә инде ашауының рәте булмағанды эшкә лә рәте юҡ тип белгәндәр. Әлбиттә, бында аш ашап ултырыу ғына күҙ уңында тотолмаған, бында кешенең әрһе-

генә булып ҡала. Мин 42 йыл буйы мәғариф системаһында эшләгән кеше булараҡ, ауыл балаларына бындай ҡараштьı һис тә хупламайым. Был йәһәттән Берҙәм дәүләт имтиханы индереү, асылда, ауыл балаларының юғары белем алыу мөмкинлеген сикләй, минеңсә. Мин бындай күренештәрҙе тормош парадокстары циклына индерәм.

### Беҙ ҡарт милләт түгел...

Урыҫтарҙа бөгөн Толстой һымаҡ яҙыусы юҡ. Толстой Кавказ һуғышы хаҡында яҙған, ә ниңә Чечен һуғышы барған ваҡытта Проскуриндар, Прохановтар, Беловтар Хаджимораттар хаҡында яҙмай? Урыҫтарҙа Толстойҙар булмаған һымаҡ, беҙҙә Бабич юҡ. Был донъя әҙәбиәтенең генә түгел, замананың ғәриплеге. Бар ул оҫта шиғыр яҙыусылар, әммә милләтебеҙ хәҡиҡәтте бар донъяға ишетерлек итеп сатнатып әйтерлек XXI быуат Бабичын көтә барыбер.

# БАБИЧЫН КӨТӘБЕҘ...

## көткән кеүек

### Глобалләшеүҙең иҡтисади юлы

Совет осоронда тауар, аҙыҡ-түлек етештереү менән шөғөлләнгән тотош илебеҙ бөгөн илебеҙ байлығын күмәртәләп һәм ваҡлап һатыу менән шөғөлләнә. Беҙҙең илдә бөтә нәмә һатыла. Тәүҙә эре-эре предприятиелар, нефть һәм нефть химияһы тармағы хосусилаштырылды. Тораҡ урман-тауҙарға, йылғаларға сират етте. Колхоздар милкен дәүләт алдындағы бурысын ҡаплау һылтауы менән һатып бөткәндән һуң, хәҙер сират илебеҙҙә әле һатылып бөтөлмәгән ергә етте. Тағы ла шуныһы: мөлкәтте һатыуҙан килгән аҡса бурысты ҡаплауға китмәне, сөнки бурыстарҙы дәүләт списать итте. Кем ғәйепле бында? Президент түгел бит. Ваҡытлыса рәйес булып эшләгән кеше, идара ағзалары кеҫәһенә инеп ятты был аҡса. Ә бит ер халыҡтыҡы. Ҡайһы бер ололарҙың һандыҡ төптәрендә әле булһын өҫтәл ҙурлыҡ ерҙең колхозға бирелеүе хаҡындағы күк ҡағыҙы ята. Унда текст ике телдә алтын хәрефтәр менән яҙылған. Әйтәйек, "Салауат колхозының ер акты", тип.

Беҙ, ниндәй генә булмаһын, дәүләт сиктәрендә йәшәйбеҙ. Революцияға тиклем Рус батшалығы империяһында йәшәнек, совет осоронда совет империяһы составында булдыҡ, хәҙер Рәсәй Федерацияһында көн күрәбеҙ. Революцияға тиклем Столыпин реформаһы, асылда, беҙҙең ерлектә үтте. Беҙҙең ауылдар янында Харьков, Казанка, Саратов, Киев тигән ауылдарҙың булыуы шул реформа-

һуғыштың хәлебеҙҙе насарайтыуын, һуғыштан һуңғы ауырлыҡтарҙан һуң тағы ла яҡшыра барыуын иҫкә төшөрәбеҙ. Шулай һөйләшеп ултырғанда беҙҙең аранан һуғыш юлы үткән бер ағайҙың: "Мин һуғышта саҡта хеҙмәт көнөн үтәмәгәне өсөн ҡатынымды төрмәгә ултырттылар. Әгәр ҙә әсәм булмаһа, ике балабыҙ үлер ине", - тип әсенеп һөйләгәне иҫемдә ҡалған. Һуғыш ваҡытында, унан һуңғы йылдарҙа властағылар кешегә ҡарата бына ошондай мөнәсәбәттә булды. Хеҙмәт кешеһенә талаптар ул йылдарҙа енесенә, йәшенә, һаулығына ҡарамай, иң юғары кимәлдә ҡуйылды. Ул йылдарҙа тағы ла мәжбүри рәүештә түләткән дәүләт поставкалары булды. Әйтәйек, йорт башына 100 кило ит, 10 кило май, 40 дана йомортҡа һ.б. Бына ошондай йылдарҙы тиҙ онотабыҙ, тамағыбыҙ туйғас, шашына, ҡоторона башлайбыҙ.

Хәҙерге заман иһә, беҙҙең тормошҡа үҙенең ҡырағай закондары менән килеп инде. Кешелеккә ят закондар ҡабул итә беҙҙең ил законсылары. Ә бит, илдең йүнәлешен үҙгәртеү зарурлығы булған хәлдә лә, уны әҙ булһа ла әҙәмсә итеп көйләргә

***Хәҙерге заман иһә, беҙҙең тормошҡа үҙенең ҡырағай закондары менән килеп инде. Кешелеккә ят закондар ҡабул итә беҙҙең ил законсылары. Ә бит, илдең йүнәлешен үҙгәртеү зарурлығы булған хәлдә лә, уны әҙ булһа ла әҙәмсә итеп көйләргә була ине. Хосусилаштырыуҙы ябай халыҡ аңлап та өлгөрмәне, иң йылғырҙар алдан өлгөрөп, ил байлығын ҡулға төшөрҙө. Был хәлдең һөҙөмтәһен бөгөн күрәбеҙ инде. Бөгөн илебеҙ халҡы алдындағы иң ҙур проблема - эшһеҙлек. Әгәр ҙә кешенең эше булһа, хеҙмәт режимы кешене тәртипкә өйрәтә. Эше булған кешенең буш ваҡыты ла, эсеп йә башҡа төрлө ҡырын эштәр атҡарып йөрөргә ваҡыты ла ҡалмай. Ҡыҫҡаһы, илебеҙҙә барлыҡҡа килгән бик күп һандағы кире күренештәрҙең тамырында эшһеҙлек ята.***

психологияһына кире йоғонтоһо ла булды. Әйтәйек, шул уҡ "хеҙмәт минимумы" мәсьәләһен генә алайыҡ. Үҙенә план итеп ҡуйылған минимумды үтәгән кеше, әйтәйек, шунан артығын үтәргә әҙерме икән? Әйтеүе ҡыйын. "Трудодень" хаҡына ғына эшләүсе кеше журналға ҡуйылған билдә өсөн генә хеҙмәт итһә, был да ҙур маҡсат түгел. Шул уҡ ваҡытта илке-һалҡы ғына эшләүселәргә лә бер үк кимәлдә ашлыҡ бүленә. Быларҙан сығып, ниндәй һығымта яһарға була: хужалыҡ итеүҙең колхоз һәм совхоз формалары нисек кенә прогрессив ысул булмаһын, ул баштан уҡ дөрөҫ йүнәлештән китмәгән. Йәғни бер коллективта эшләүселәрҙе баштан уҡ бер-береһенә һалыныу психологияһы тәрбиәләнә башлаған. Мин улай уҡ тип тә уйламаҫ инем, әле килеп, колхоз-совхоздар юҡҡа сыҡҡайны, ауылдың әҙмәүерҙәй егеттәре инде бына ике тиҫтә йылдан ашыу Алланнанмы, һауананмы нимәлер көтөп тик ята. Бактиһәң, беҙ маҡтаған шул уҡ колхоз һәм совхоз системаһы уларҙы бер үк ваҡытта "ата ялҡау" итеп тә тәрбиәләгән икән. Ә бит беҙ был системала 70 йыл самаһы ғына йәшәп ҡалдыҡ. Уға тиклем бит халҡыбыҙ меңәрмеңәр йыл ошо ерҙә ғүмер ит-

ҙлеге ҡаралған. Ашағанда әрһеҙләшә белгән кеше эштә лә шундай уҡ сифатҡа эйә. Кешенең психологияһын, булмышын бер көндә генә үҙгәртеп булмайҙыр. Бының өсөн йылдар талап ителә.

### Тормош парадокстары

Бөгөн ауыл мәктәбе балалары менән ҡала балалары өсөн Берҙәм дәүләт имтиханында берҙәй үк талап ҡуйыла. Әйтәйек, ҡала балалары Берҙәм дәүләт имтиханын еңелерәк, юғарыраҡ бал менән бирә. Беҙҙең район ауылдары балаларының күбеһе һынауҙы район үҙәге Аҡъярҙа килеп тапшыра. Уларҙы бында автобус алып килә. Ҡарап торғайным: имтихан биреп сыҡҡан балалар автобус янына йүгереп килеп, үҙҙәре менән бергә алып килгән термостан сәй эсеп торалар. Үҙҙәрен йәлләп ҡуйҙым. Йәшәү шарттары бер үк булмаған балаларға бер үк кимәлдә талап ҡуйылыуына мин ҡаршымын. Әйтәйек, ауыл балаларының Аҡъяр, Өфө ҡалаһы балалары менән бер тигеҙ уңышҡа өлгәшеренә икеләнәм. Ауыл мәктәбендә бер класта 15 бала уҡып, шуларҙың бишәүһе Берҙәм дәүләт имтиханын бирә алмаһа, ул урта белемле крәҫтиән

Урыҫтар - Пушкинды, татарҙар Туҡайҙы көткән кеүек.

Бер көнө телевизорҙы ҡабыҙып ҡарап ултырһам, хөрмәтле бер ғалимыбыҙ: "Беҙҙең милләт ҡартайған", - тигән һүҙ әйтеп ысҡындырҙы. Был Гумилев теорияһы. Милләтебеҙ оло йәштә булһа ла, беҙ ҡартайғандар иҫәбенә ингән милләт түгел. Ҡартайған милләт үҙенең телен юғалта, йәшәү рәүешен, йолаларын үҙгәртеп, икенселәр үрнәгенә эйәреп, икенсе халыҡ булып йәшәй башлай. Беҙ әле барбыҙ, башҡортса йәшәйбеҙ, туған телебеҙҙә һөйләшәбеҙ, үҙ асылыбыҙҙа донъяға мөнәсәбәтебеҙҙе белдерәбеҙ, аңыбыҙ башҡортса. Шулай булғас, беҙ әле ҡартайған милләт түгел. Минеңсә, был ғалим иптәш әҙерәк аңламайыраҡ әйтеп ебәргәндер был фекерен. Беҙ был ергә бер ерҙән дә күсеп килмәгәнбеҙ, кемдендер ерен яулап алмағанбыҙ. Бер ҡайҙа ла китмәйәсәкбеҙ. Милләтте ҡартайған тип әйтергә ярамай. Хатта ки шул уҡ Гумилев теорияһы буйынса ҡарағанда ла 100-ҙән ашыу ырыуҙан ойошҡан милләт бер ҡасан да ҡартаймаясаҡ, уның ырыу-ара ғына ла әллә нисә мең йылға етерлек ҡан алмаштырыу, ҡан яңыртыу потенциалы бар.

Ғөмүмән, күҙ терәп торған ғалимдарыбыҙ, шағирҙарыбыҙ, яҙыусыларыбыҙ һүҙ менән һаҡ эш итһендәр ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Нисек кенә тойолмаһын, Рәшит Ғимат улының әңгәмәһен уҡығас, киләсәгебеҙгә ҡарата өмөт, ышаныс уяна. Халҡыбыҙ рухының ныҡлығына, күңеленең паклығына, йөрәгенең асыҡлығына бәйле был ышаныс, был өмөт.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

> ✓ *Һорауҙы, бәлки, бер аҙ үҙгәртеп, шиғриәтте ниндәй өс көс йәшәтә, тиһәк, дөрөҫөрәк булмаҫ инеме икән? Шулай иткәндә лә барыбер әлеге өс яуапты әйтер инем. Шиғриәт моң, һөйөү, һағыштан яралалыр ул.*

ӘҘИП ҺҮҘЕ

# АҠ НУРҘАРҒА ҮРЕЛЕП КҮТӘРЕЛДЕМ,

## Күңелемә тулды йырҙарым

**Билдәле шағирә Зөһрә Ҡотлогилдина ошо көндәрҙә түңәрәк кенә юбилейын билдәләй. Ошо айҡанлы ғына түгел, шағирәнең шиғриәтенә һыуһаған уҡыусыларыбыҙҙың танһығын ҡандырыу өсөн дә юбилярға бер нисә һорау биреп, уның яуаптарын һәм бер нисә шиғырын тәҡдим итергә ниәтләнек.**



**▸ Һине илаһи шиғриәт донъяһында йәшәтеүсе өс көс - нимә улар?**

- Һорауығыҙға былай тип яуап бирер инем: **моң, һөйөү, һағыш.**

Моңдан башлайыҡ. Әсәйем, Миңһылыу Шәрифйән ҡыҙы, бик матур йырлай ине. Ул оҙон көйҙәрҙе һуҙғанда хатта донъя күргән ирҙәрҙең илап ултырғанын күргәнем булды. Күңелендә йөрөгән моң ҡан менән, йән менән беҙгә тапшырылғандыр, тип уйлайым.

Атайым, Сәлимйән Ноғман улы, шиғыр яҙған. Һуғыштан яраланып, сирләп ҡайтҡас, Өфөлә госпиталдә дауаланып ятҡанда латин хәрефтәре менән яҙған ике-өс ҡалын дәфтәр шиғырҙары һаҡлана. Тальян гармунда уйнап беҙҙе бейеткән. Ул үлгәндә миңә йәш ярым ғына булғас, иҫләмәйем, апайым дүрт йәштә ҡалғас, хәтерләй. Шәрифйән олатайым урамда үткән кешеләргә шиғыр сығарып, таҡмаҡ әйтеп ҡалыр булған. Ноғман олатайым да шулай уҡ тальянда уйнаған, халыҡ йырҙарын үҙенсәлекле башҡарған. Шул моңдар апайым, шағирә Миңлегөл Хисамова менән икебеҙгә бирелмәй, кемгә бирелһен?!

Һөйөүҙән ярала кеше. Шул һөйөү ғүмер буйы оҙата килә беҙҙе. Ата-әсәнең - балаға, баланың - ата-әсәһенә, ауылына, туғандарына, тыуған төйәгенә, йәренә, еренә мөхәббәт йәшәтә кешене.

Һағыш та әҙәм балаһы тыуғандан алып юлдаш кешегә. Баланың әсәһенең күкрәк һөтөнән айырылыуы, сабый саҡтан атайһыҙ ҡалыу, етемлектән кәмһенеүҙәр, юҡһыныуҙар, юғалтыуҙар, яҡын кешеләрең менән мәңгелеккә хушлашыуҙар, әрнеүҙәр, тәүге һөйөү ғазаптары, үкенестәр...

Шиғриәт - күңел торошо. Тимәк, бөтә ошо кисерештәр йөрәк аша үтеп, моң булып ярала ла шиғыр булып тыуа. Әгәр яҙғандарың башҡалар күңелендә лә ауаздашлыҡ таба, хистәр уята, уйландыра, һағышландыра икән, тимәк, йөрәктәге йөрәккә барып еткән, тигән һүҙ.

Һорауҙы, бәлки, бер аҙ үҙгәртеп, шиғриәтте ниндәй өс көс йәшәтә, тиһәк, дөрөҫөрәк булмаҫ инеме икән? Шулай иткәндә лә барыбер әлеге өс яуапты әйтер инем. Шиғриәт моң, һөйөү, һағыштан яралалыр ул.

**▸ Әҫәрҙәреңә көй яҙалар, аҙаҡ уларҙы яратып йырлайҙар - тимәк, шиғырҙарың йөрәк ярып тыуа, шуға ла улар моңло, көйлө, уйлы... Ә бына "йырламаған", көйһөҙ шиғырҙар буламы? Йыр яҙылмаған шиғыр шиғырмы?**

- Яуапты һорауҙың аҙағынан башлайыҡ. Әлбиттә, шиғыр. Трибун шағирҙар бар. Публицистик шағирҙар бар. Публицистик йүнәлештә яҙылған, агитация, саҡырыу, оран, мөрәжәғәт рәүешендә ижад ителгән шиғырҙар бар. Мин ҡапыл ғына иҫемә төшөрә алмайым: Маяковскийҙың шиғырҙарына яҙылған йырҙар күпме икән? Ә бит улар заманында оран булып саҡырыуҙары менән йырҙан кәм булмағандыр, тәьҫир көсө, йоғонтоһо хатта көслөрәк тә булғандыр әле.

Ә минең үҙемә килгәндә, бер ваҡытта ла, бер ҡасан да, бер композиторға ла, көй яҙығыҙ әле, тип мөрәжәғәт иткәнем булманы. Бик күп йылдар элек класташым Айрат Ҡобағошов үҙе менән бергә сәнғәт институтында уҡыған Салауат Низаметдиновҡа, күҙҙәре күрмәгәс, "Йәш көстәр" альманахында сыҡҡан минең шиғырҙарҙы уҡыған. Салауат яҙған "Ялан сәскәләре" бик популяр булып китте, Өфө урамдарында - студенттар, табындарҙа өлкәндәр йырлай ине. Ошо йыр яҙылғандан бирле Салауат менән оҙаҡ йылдарға һуҙылған ижади дуҫлығыбыҙ башланды. Гел генә яңы шиғырҙарҙы һорап алды. Оҡшағандарына көй яҙҙы. Башҡа композиторҙар ҙа ижадыма мөрәжәғәт итте. Тик заказ буйынса бер ваҡытта ла яҙа алмайым.

**▸ Бәғзе берәүҙәрҙең һинең тура һүҙеңде күтәрә алмағаны, хатта ки тура һүҙлелекте кире сифатҡа тиңләүҙәре мәғлүм. Ундайҙарға яуабың? Тура һүҙлелегең һиңә йәшәүгә ҡамасауламаймы?**

- Ысынын ғына әйткәндә, тураһын ярыу шәплекме, әллә насармы - ошо йәшкә етеп, аңлап бөтә алғаным юҡ. Ҡайһы саҡта, мәҫәлән, үлемесле сирле кешегә, йәшәүгә өмөтөн һүндермәү, терелеүгә ышанысын ҡалдырыу өсөн алдарға, дөрөҫөн әйтмәҫкә мәжбүр табиптар. Изге уйҙан сығып эшләнгән алдашыу был осраҡта, бәлки, кәрәктер ҙә. Сирле кешенең күпмегәлер ғүмерен дә оҙайталыр был ялған. Икенсе яҡтан ҡарағанда, кеше үҙ хәле тураһында дөрөҫөн белһә, әйтәһе һүҙен әйтеп, атҡараһы эшен бөтөрөп тә тынысыраҡ китер кеүек был донъяларҙан.

Тура һүҙлелек кире сифатмы? Белмәйем. Бәлки, ҡәтғи итеп түгел, кешене рәнйетмәҫлек итеп, йомшағыраҡ формала еткерергә кәрәктер ул дөрөҫлөктө. Унда ла кинәйәләп әйткәненде аңларлыҡ кеше булһа... Ундайҙарға яуабың, тиеүегеҙгә мин үҙемдең

Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.

### ЯҘЫЛМАҒАН ШИҒЫРҘАР

Тыумаған бала шикелле
Яҙылмаған шиғырҙар.
Ҡалды... ҡалды... ҡалды инде
Йөрәккә һауып ҡандар.

Атмаған бөрөгә оҡшап,
Ҡырауҙан ҡурылдылар.
Тик аҙаҡ, беҙ - һинеке, тип,
Йәнемә һырындылар.

Аҡмаған йылғалар бармы?
Атмаған таң буламы?
Һайрамаҫ ҡош, килмәгән көҙ,
Ҡайтмаған шаң буламы?

Һеҙ ҙә бер саҡ ҡайтырһығыҙ,
Яҙылмаған шиғырҙар.
Улар, мәле етеү менән,
Өр-яңынан тыуырҙар.

### ДОНЪЯЛАР БУТАЛҒАНДА

Иманлылар артҡан һайын,
Әҙәйә бара иман.
Алла һүҙен ҡалҡан итеп
Иманға килә яман.

Донъялар тағы буталды,
Иманһыҙ битлек кейҙе.
Көндөҙ хәйер алған хәҙрәт
Кисен хәмер һемерҙе.

Ил алдында вәғәз һөйләп,
Аҡыл бирә йәштәргә.
Ә өйөндә яҡындары
Күмелә күҙ йәштәргә.

Кемегеҙгә ышанырға,
Эй, Алланың ҡолдары?
Изгелектәр юраймы һуң
Доға ҡылған ҡулдары?

Шуға аралашсыларһыҙ
Өндәшәм мин Хоҙайға.
Кисер, һүҙем хаҡ булмаһа,
Түҙмәй әйттем шулай ҙа.

* * *

Был байрамдың мин хужаһы түгел,
Һеҙ хужаһы - бәйге аттары.
Тик мин беләм: майҙан гөж килгәндә
Тамашасы булыу хаҡтарын.

Эйе, беләм: старт һыҙығынан
Киҫкәнгәсә финиш таҫмаһын.
Күпме хеҙмәт һеҙгә һалынғанын,
Күпме әсе тирҙәр тамғанын.

Барса халыҡ, аяғөҫтө баҫып,
Ҡул сапҡанда һеҙҙе алҡышлап.
Баштарығыҙ бер үк әйләнмәһен
Бер минутлыҡ ҡына балҡыштан.

Дан үрҙәре - ымһындырғыс тәхет,
Әйҙәп тора һәр саҡ үҙенә.
Шул түбәлә ябай булып ҡалыу
Рәхмәт булыр остаз йөҙөнә.

* * *

Фейерверктарһыҙ үтте ғүмер,
Салюттар ҙа күктә атманы.
Һикәлтәле, ташлы һуҡмаҡтарға
Ҡыҙыл келәм бер кем япманы.

Үҙ хәлемсә барҙым, юлдар ярҙым,
Береһенә бәләм һалманым.
Ташлы һуҡмаҡтарҙан ҡайрылманым,
Ҡанһырағанда ла табаным.

Хыялыма тауҙар әйҙәп торҙо,
Күктәр һондо миңә нурҙарын.
Аҡ нурҙарға үрелеп күтәрелдем,
Күңелемә тулды йырҙарым.

Күк көмбәҙе фейерверк булды,
Салют булып йондоҙ атылды.
Тәбиғәтем шулай ололаны
Булмышыма тоғро затымды.

* * *

Сабый саҡҡа әгәр ҡайтып булһа,
Йәш ярымлыҡ мәлгә китер инем.
Ғүмеремдә бер ҡат әйтә алмаған
"Атай!" тигән һүҙҙе әйтер инем.

Йәшлегемде ҡайтарыптар булһа,
Һине күргән мәлгә китер инем.
Йөрәгемдә йөрөтөп, әйтә алмаған
"Һөйәм!" тигән һүҙҙе әйтер инем.

Үткәндәргә ҡайтыр әмәл булһа,
Әсәйле лә мәлгә китер инем.
Ҡосағына һыйынып, тағы бер ҡат
"Әсәй!" тигән һүҙҙе әйтер инем.

Киләсәккә әгәр барып булһа,
Балам тормоштарын күрер инем.
Кескәй саҡтағылай бер яратып,
"Балам, бәхетле бул!" тиер инем.

йәш саҡта яҙған бер шиғырым менән яуап бирәм.

*Мин ниндәйме?*
*Бына шундай.*
*Нисек бармын -*
*күҙ алдында.*
*Иңдәш булһам,*
*булырмын, тик*
*Көндәш булмам хыялында.*

*Мин әҙермен артмаҡларға*
*Шатлығың да, көйөүең дә.*
*Йәндәш булһам,*
*булырмын, тик*
*Йәрҙәш булмам һөйөүеңдә.*

*Яңғыҙ итмәм аймылышта,*
*Хаҡ хөкөм көт*
*яңылышында.*
*Көйҙәш булһам,*
*булырмын, тик*
*Өйҙәш булмам*
*яҙмышында.*

Һуңғы һорауығыҙға яуабым: тура һүҙлелек ҡамасаулай ҙа, ярҙам да итә. Һәр хәлдә үҙемә, булмышыма хыянат итмәй йәшәүем менән намыҫым алдында тоғромон. Бөтәһе менән дә килешеп, дәрәжәләрек, юғары вазифалар биләгән кешеләр янында йышыраҡ йөрөһәм, бәлки, мин дә әллә ниндәй "уныш"тарға өлгәшкән булыр инем. Бер генә миҫал. Ике тапҡыр, береһе ун йыл элек, икенсеһе быйыл Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге журналистар премияһына публицистик китаптарымды тәҡдим иттем. "Тамырҙарым - ерҙә, йәнем - күктә", "Һуғыш балалары - тарих яралары" тип аталған йыйынтыҡтарымды был премияға үҙем дә, ҡәләмдәштәр ҙә, уҡыусылар ҙа лайыҡ тип иҫәпләнә. Әгәр шулай булмаһа, мин уны тәҡдим итеп тә тормаҫ инем. Баҫалҡы булһам да, барҙы бар тип әйтергә кәрәк. Ләкин, икеһендә лә, ни сәбәптәндер, кемдәрҙер минең хеҙмәттәремде был бүләккә лайыҡ тип тапманы. Хәйер, премиялар һәр ваҡыт ҡына ғәҙел биреләме һуң әле?! Ярай, быныһы - уларҙың намыҫында. Халыҡ баһаһы мөһимерәк миңә.

Мин бер ваҡытта ла күренекле, талантлы кешеләр хаҡында яҙыуҙы үҙ маҡсат итеп ҡуйманым. Ҡайһы берәүҙәр, уларҙы яҙып, улар ышығында үҙҙәре лә күренеп ҡалды. Мин, киреһенсә, быға тиклем уҡыусыларға билдәле булмаған, баҫалҡыраҡ ижадсыларҙы күрһәтеүҙе, тәүге булып улар менән таныштырыуҙы күҙ унында тоттом. Балалар матбуғатында эшләгәс, улар араһында ла тыйнаҡтарына иғтибар иттем.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Билдәле шағирә генә түгел, журналист та, студент йылдарынан уҡ әлеге "Йәншишмә" ("Башҡортостан пионеры") гәзитендә эшләй башлап, тиҫтәләгән йәш хәбәрселәргә ҡанат ҡуйыусы, ошо гәзиттең әҙәбиәт һәм сәнғәт бүлеге мөдире Зәһрә Сәлимйән ҡыҙы Ҡотлогилдина-Мәһәҙиеваны тыуған көнө менән ихлас ҡотлайбыҙ! Яңы ижад үрҙәре, сәләмәтлек, ғаилә бәхете теләйбеҙ.**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**әңгәмәләште.**

ҠУЛДАН КИЛӘ!

**Башҡорт өсөн ҡурай, башҡорт балы, моңо ниндәй әһәмиәткә эйә булһа, тарихы алыҫ быуаттарға барып тоташҡан көрәш тә шулай уҡ ҡәҙерле. Көрәште барыһы ла белә һәм ярата, ләкин уны һабантуйҙың бер элементы ғына итеп ҡабул итеүселәр ҙә бихисап. Көрәш беҙҙең өсөн бары тик спорт төрө генә түгел, ә ҡан, рухыбыҙға һеңгән йәшәйешебеҙ. Бының нәҡ шулай икәнлеген бөгөнгө әңгәмәсем, көрәш буйынса Башҡортостан, Рәсәй һәм ике тапҡыр Европа чемпионы булған Учалы егете Марсель Йәлил улы ЙОСОПОВ та раҫлай.**



# КӨРӘШ МИҢӘ...

## рухи ныҡлыҡ бирҙе

### Тәүәккәллегем үҙен аҡланы

Мин Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған физкультура хеҙмәткәре, Башҡортостандың Көрәш буйынса федерацияһы башҡарма директоры, тренер Йәлил Динмөхәмәт улы Йосопов ғаиләһендә тыуып үҫтем. Бала саҡта төрлө спорт түңәрәктәренә йөрөп ҡараһам да, күңелемә ятҡаны булмағандыр инде, буш ваҡыттарымды атайым янында, көрәшселәрҙең шөғөлләнгәндәрен ҡарап үткәрә инем. Атайым мине лә, ҡустыларымды ла, көрәш менән шөғөлләнегеҙ, тип ныҡыманы, сөнки бала барыһын да үҙе хәл итергә тейешлеген, уны ниндәйҙер түңәрәктә шөғөлләнергә өгөтләргә, ҡурҡытырға ярамағанлығын атайым яҡшы аңлағандыр, тим. Ун йәшемдә мине көрәште һайларға мәжбүр иткән ваҡиға булды: өсөнсө ҡаттан ҡолап төшөп, ике ҡулымды ла һындырҙым. Ваҡ ярсыҡтарға ярғыланған һөйәктәрҙе врачтар сүпләп тигәндәй йыйҙы, дауаханала оҙаҡ ятырға тура килде. Атайымдың ҡырҡа ҡаршы тороуы ғына ҡулымды ҡырҡыуҙан ҡотҡарып ҡалды. Ҡаҙаланғандан һуң спорт түңәрәктәре ишектәре минең өсөн бөтөнләй ябылды, сөнки миңә буш күнәк тә күтәрергә ярамай ине. Ләкин атайым янына йөрөүҙе туҡтатманым, элеккесә, көрәшселәрҙе күҙәттем, көндән-көн ҡыҙыҡһыныуым артты һәм мин, барлыҡ тыйыуҙарға ҡарамай, 15 йәштә көрәш балаҫына аяҡ баҫтым. Йәйләп шөғөлләнә башланым, еңел күнегеүҙәрҙән ауырҙарына күстем, техник алымдарҙы шымарттым һәм тәүге тапҡыр 1999 йылда Башҡортостанда үткән көрәш буйынса донъя чемпионатында Башҡортостан һәм 18 йәшкә тиклемге көрәшселәр араһында Рәсәй чемпионы исемен яуланым.

### Көрәшсе булыр өсөн нимә талап ителә?

Барлыҡ ярыштарҙа ла миңә бөтә яҡлап камиллаштырылған техник әҙерлегем еңеү килтергәндер, тип уйлайым, сөнки минең һаулыҡ физик әҙерлеккә көс төшөрөргә ирек бирмәй ине. Тимәк, көрәштә барыһын да көс кенә хәл итмәй, ә оҙайлы күнекмәләр ярҙамында урын-еренә еткерелгән көрәш алымы, таһыллыҡ, сослоҡ, үҙ-үҙеңә көслө ышаныс та ярҙам итә. Ғөмүмән, үҙеңә ышаныс үҙе үк ярты еңеү тигәнде аңлата. Шулай уҡ ярышташыңдың көсөн үҙ файҙаңа ҡуллана белеү ҙә күпте бирә. Көрәшсегә йыйнаҡ, ыҡсым булырға өйрәнергә кәрәк, уны ярыштар ваҡытында көрәштән башҡа бер нәмә лә борсомаҫҡа, иғтибарын бүлмәҫкә тейеш...

### Мине әүәләгән шөғөл

Алға ынтылыш, түҙемлек, тотанаҡлыҡ, сабырлыҡ - былар барыһы ла көрәш менән шөғөлләнеүем арҡаһында булдырылған сифаттар. Шулай уҡ ныҡышмалылыҡ, характер ныҡлығын һәм рухи юғарылыҡты ла көрәш "бүләк" итте. Үҙ халҡымдың асылына төптәнерәк төшөнөүгә булышлыҡ итеүсе лә - көрәш.

Ә мин үҙем көрәшкә нимә бирә алдым, тигән һорауға яуабым ошондай: әгәр ҙә минең шөғөләм аша донъяла бер генә кеше булһа ла башҡорт халҡы тураһында хәбәрҙар була икән - был минең өсөн оло ғорурлыҡ. Көрәш минең өсөн бары тик спорт төрө генә түгел, ул минең йәшәйешем, көнитмешем. Уны алға илтеүсе оло юл менән сағыштырып була. Ә башҡа барлыҡ ҡыҙыҡһыныуҙарым, тормошомдағы кешеләр, ваҡиғалар ошо оло юлға килеп тоташыусы һуҡмаҡ ҡына. Был һуҡмаҡтар ярҙамында минең төп юлым киңәйә, офоҡтарым асыла, ләкин ниндәйҙер һуҡмаҡҡа боролоу юҡ. Шулай уҡ көрәште юл сатындағы светофорҙың йәшел төҫө тип тә әйтер инем, сөнки тормошомдоң мине алға әйҙәгән яҡты һәм матур саҡтары нәҡ көрәш менән бәйле.

Көрәш ул рухи эстәлеге булған спорт. Көрәш беҙҙә генә түгел, ә татарҙарҙа, украиндарҙа һәм башҡа халыҡтарҙа ла бар. Ләкин башҡорттоң көрәшкә мөнәсәбәте бөтөнләй икенсе. Миҫал өсөн украин халҡын алайыҡ. Улар өсөн көрәш бары тик күп һанлы спорт төрҙәренең береһе, байрам сараларында күрһәтелгән мауыҡтырғыс уйын ғына булһа, беҙҙең өсөн көрәш - бөтөн күңелебеҙ, уйыбыҙ, рухыбыҙ менән тығыҙ бәйләнештә булған йәшәйешебеҙ.

### Бала күңелен изгелеккә әйҙәү мөһим

Тормош һуҡмағы Силәбегә алып барғас та мин үҙем яратҡан шөғөл менән булдым, еңеү артынан еңеү яуланым. Силәбе башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Силәбелә Көрәш буйынса федерация төҙөргә тәҡдим иткәс, ҡуш ҡуллап риза булдым һәм оҙаҡҡа һуҙмай, был эште атҡарып та ҡуйҙыҡ. 2007 йылдың октябрендә Арғаяш районында федерациябыҙҙың үҙәген астыҡ. Бөгөнгө көндә Силәбе өлкәһендә заманса йыһазландырылған, күнегеүҙәр өсөн кәрәкле бар әйбере булған 13 залыбыҙ эшләй һәм унда 500-ләп бала бушлай шөғөлләнә. Түңәрәктәребеҙ күберәген башҡорттар йәшәгән райондарҙа урынлашһа ла, унда теләгән һәр кем килә һәм шөғөлләнә ала. Үҙебеҙҙең түңәрәктәр, көрәш спорты ярҙамында һәр икенсе баланың дөрөҫ юлдан китеүенә булышлыҡ итә алабыҙ икән, тимәк, беҙ кәрәкле һәм файҙалы эш менән булабыҙ.

### Яҡшы тренер - көрәшсенең ярты еңеүе

Иң талантлы көрәшсе лә, ниндәй генә талантҡа эйә булмаһын, янында оҫта тренеры булмаһа, юғары ҡаҙаныштарға өлгәшә алмай. Ғөмүмән, яҡшы тренер - ул көрәшсенең ярты еңеүе тип әйтергә мөмкин. Был йәһәттән миңә уңыш йылмайҙы, сөнки атайымдың ҡулы аҫтында көрәш серҙәренә төшөнөү бәхете тейҙе. Тренер Йәлил Йосопов бик ҡәтғи, талапсан, бер ситуацияла ла йомшаҡлыҡ күрһәтмәҫ кеше. Кемдер бары тик һөнәре буйынса ғына тренер булырға мөмкин, ә кемгәлер был юғарынан бирелгән һәләт, оҫталыҡ. Уның нәҡ ошондай һәләткә эйә тренер булыуын ишетеп түгел, ә үҙемдең тәжрибәнән сығып әйтә алам. Бөгөнгө көндә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика интернат-гимназияла республиканың ҡала һәм райондарынан ғына түгел, ә башҡа региондарҙан да килгән егеттәрҙе көрәш серҙәренә өйрәтеүсе Йәлил Динмөхәмәт улының тәрбиәләнеүселәре артабан да ҙур уңыштарға өлгәшәсәгенә иманым камил.

### Йәмғиәт эше - алға этәреүсе көс

Тормошома оло мәғәнә биреүсе көрәштән тыш төп эшемдә лә онотмайым һәм хоҡуҡ белгесе булараҡ та алдыма алған юғары маҡсаттарға өлгәшеү - үҙемә ҡуйған тәүге талаптарҙың береһе. Шулай уҡ кешенең йәмғиәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнашыуы уға көс, алға ынтылыш бирәлер, тигән фекерҙәмен. Шуға күрә Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы комитеты ағзаһы булыуым минең өсөн оло әһәмиәткә эйә. Комитеттың башҡорт телен һәм мәҙәниәтен үҫтереүгә, өлкәләге милләт-ара татыулыҡты һаҡлауға һәм нығытыуға булышлыҡ итеү эшмәкәрлегендә минең дә ролем бар икәнлеген күреү ҡыуаныс килтерә. Үҙемде сәйәси өлкәлә лә һынап ҡарау мөмкинлеген булды һәм артабан да был юҫыҡта эшмәкәрлегемде дауам итәсәкмен, сөнки миңә йәмәғәт һәм сәйәси тормошта ҡайнап йәшәү, төрлө мәсьәләләрҙе хәл итеү, халыҡ менән бергә булыу оҡшай.

### Тыуған ерҙең ҡәҙерe сит яҡтарҙа беленә...

Алыҫ сит илдә йәшәмәһәм дә, Башҡортостанды һағынам. Матур тәбиғәте лә, күркәм кешеләре лә күңелемә яҡын һәм ҡәҙерле. Тыуған яҡтың ҡәҙерен, баһаһын сит ерҙәргә сығып китһәң генә ныҡлап төшөнәһең икән. Тыуған ягымдың яҡты бер нуры - ул ҡурай моңо. Ул бит кешегә бөтмәҫ көс, илһам биреүсе сығанаҡ. Мин айырыуса оҙон көйҙәрҙе тыңларға яратам. Бөгөнгө заман ритмдары "йәбештерелгән" ҡурай моңо күңелгә ятып бөтмәй. Әлбиттә, уларҙы тыңларға була, ләкин ысын мәғәнәһендә күңелең менән ял иткең килһә, тик ҡурай моңонон үҙен генә тыңлау зарур. Таҡы ла башҡорт балын яратам. Үҙебеҙҙең балдан башҡа бер төрләһен дә ҡабул итмәйем. Уның файҙаһы бар донъяға мәғлүм бит инде. Силәбелә хатта теш врачына барһам да: "Һин Башҡортостанданмы? Башҡорт балы ашап үҫкәнлегең әллә ҡайҙан күренеп тора", - тиҙәр. Ә беҙ ошо ҙур бүләкте баһалап бөтмәйбеҙ. Ә ҡымыҙыбыҙ һуң, ҡымыҙыбыҙ! Бер уртлау ҙа тәнгә сихәт, йәнгә рәхәтлек бирә. Бар арыу-талыуҙарҙы оноттора. Шуға күрә киләсәктә Башҡортостаныма ҡайтып, яратҡан Ҡалҡан күле буйында аттар көтөп, ҡымыҙ эсеп, башҡорт балы ашап, ҡурай моңона сорналған үҙ өйөмдә ғаиләм менән матур тормош көтөү хаҡындағы хыялымды тормошҡа ашырыу өсөн бар көсөмдә һаласаҡмын.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**6 һәм 7 августа Өфө ҡалаһының "Динамо" (К.Маркс урамы, 2) стадионында һабантуй еңеүселәре араһында көрәш буйынса Асыҡ республика турниры уҙа. Көрәш майҙанында республика һәм Рәсәйҙең башҡа региондарынан 150 спортсы көс һынашасаҡ. Турнир һөҙөмтәләре буйынса Екатеринбург ҡалаһында үтәсәк көрәш буйынса Урал Кубогында ҡатнашыу өсөн республиканың йыйылма командаһы билдәләнәсәк.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Өс минуттан артыҡ көҙгө алдында уралырға ярамай, сөнки ул кешенең энергияһын алыу һәләтенә эйә. Ғалимдар белдереүенсә, көҙгө ратыусылар иртәрәк ҡартая, сөнки кешенең энергетикаһы көсһеҙләнә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КӨҘГӨГӘ...

## йылмайып ҡына ҡара

■ Төрлө тәжрибәләр үткәреп ҡарағандан һуң, уң ҡулы менән генә түгел, һул ҡулы менән дә яҙа белгән кешеләргә тәьҫир итеүе еңелерәк, тип белдерә психологтар. Нью-Джерсила урынлашҡан Монклер дәүләт университеты ғалимы Рут Проппер шундай тикшеренеү үткәргән. Беренсе төркөмгә ике ҡулы менән дә, икенсеһенә уң ҡул менән генә яҙа алыусылар йыйылған. Һынауҙар барышында уларҙың барыһы ла йә күңелле, йә ҡыҙғаныс, йә хәүефле берәй ваҡиға тураһында уйлаған. Был ваҡытта лабораторияла классик музыка уйнатҡандар. Кем ике ҡулы менән яҙа белә, шулар ғалимдар ҡушҡан тойғаларға тиҙерәк бирелгән. Белгестәр аңлатыуынса, бындай кешеләрҙең уң һәм һул мейе ярымшарҙарын бәйләп тороусы нервылар туҡымалары нығыраҡ үҫешә. Был уларҙың эмоциональ әүҙемлеге һәм ситтәрҙең тәьҫиренә тиҙерәк бирелеүен аңлата.

■ Эш хаҡының күләменә төрлө факторҙар тәьҫир итә, мәҫәлән, белем кимәле, кешенең шәхси һәм эш сифаттары. Баҡтиһәң, эш хаҡының күпме булыуы кешенең ғаиләһен ниндәй итеп күреүенә лә бәйле икән. Америка ғалимдарының 26 йыл дауамында үткәргән тәжрибәһе күрһәтеүенсә, ҡатын кеше өйҙә ултырырға һәм ғаилә менән шөғөлләнергә тейеш тигән традицион ҡарашлы ир-ат демократик ҡарашлы ирҙәргә ҡарағанда 8 тапҡырға күберәк аҡса таба. Ҡатын-ҡыҙҙарҙа был ситуация киреһенсә сағылыш таба. Традицион ҡарашлы ҡатын-ҡыҙ шул уҡ вазифала эшләгән ир-атҡа ҡарағанда әҙерәк эш хаҡына риза. Феминистар ирҙәр менән бер үк күләмдә эш хаҡы алып эшләй.

■ Һәр ҡатын-ҡыҙ көҙгө алдында көнөнә әллә күпме ваҡытын сарыф итә. Белгестәр әйтеүенсә, үҙеңдең һының менән оҙайлы ваҡыт һоҡланыу проблемаға килтереүе лә ихтимал. Америка ғалимдары көҙгөнөң серле үҙенсәлектәрен асыҡлағанда, уның кешегә тәьҫирен дә тикшергән. Әгәр ҙә үҙеңде көҙгөнән йыш ҡараһаң, тиҙерәк арыйһың һәм хәтер насарая, бигерәк тә көҙгөнән күҙҙәргә ҡарау насар. Өс минуттан артыҡ көҙгө алдында уралырға ярамай, сөнки ул кешенең энергияһын алыу һәләтенә эйә. Ғалимдар белдереүенсә, көҙгө яратыусылар иртәрәк ҡартая, сөнки кешенең энергетикаһы көсһеҙләнә. Был серле йыһаздың кеше өсөн ыңғай яҡтары ла бар: әгәр ҙә көҙгөгә ҡарап йылмайһаң, һеҙҙәге ыңғай энергия көҙгөлә сығылып, кире үҙегеҙгә әйләнеп ҡайтасаҡ.

■ Ни өсөн ашағандан һуң йоҡо килә? Манчестер университеты ғалимдары асыҡлауынса, баш мейеһенең әүҙемлек өсөн яуап биреүсе күҙәнәктәре ашағандан һуң һүнеп тора. Был орексин (йоҡо һәм ял итеү гормоны) синтезлаусы нервы күҙәнәктәре мембранаһында ҡандағы глюкоза кимәленә тәьҫир итеүсе рецепторҙар булыуы менән аңлатыла. Бына ни өсөн ашағандан һуң йоҡоға тарта башлай, ә ас кеше насар йоҡлап китә.

■ Канада тикшеренеүселәре белдереүенсә, ыңғай фекер йөрөтөүселәр тормошта килеп тыуған көтөлмәгән хәлдәрҙе тиҙерәк һәм уңышлыраҡ хәл итә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттарҙы бер нисә төркөмгә бүлеп, төрлө эмоциональ характерҙағы видеороликтар күрһәткәндәр. Күңелле сюжеттар ҡараусылар классификацион һүрәттәрҙе лә тиҙерәк аңлаған, башҡа мәсьәләләрҙе лә күберәк сисеүгә өлгәшкән. Шуға ла яуаплы йәки ижади эшкә тотонор алдынан эксперттар кәйефте күтәреп алырға тәҡдим итә.

ХӘТЕРКИТАП

# ЯҘМЫШЫН ҮҘЕ ЯҘҒАН...

## күҙҙәре күрмәһә лә

**Беҙҙең быуын да оло кешеләр рәтенә инә бара. Ошо аҙмы-күпме ғүмер эсендә әллә күпме ауылдаштар, уларҙың яҙмыштары күҙ алдынан үтә. Улар араһында төрлөһө: фронтовиктар ҙа, ирҙәре һуғышта һәләк булған инәйҙәр ҙә бар. Ә бына Әбделмәмбәттә ғүмер итеп, оҫталығы менән дан алған Нуритдин Һырлыбаевтың тормош юлы үҙе бер китап итеп яҙырлыҡ. Уның әҙәм ышанмаҫлыҡ һәләттәренә, оҫталығына кем генә һоҡланмаған икән? Эшләгән әйберҙәренең ҡайһы берҙәре әле лә бар, һалып ингән йорто әле лә урамды биҙәп, матур булып ултыра. Тома һуҡыр килеш күҙле кешегә ҡарағанда ла оҫта булды ул. "Был әйберҙе ул ҡайһылайтып эшләне икән?" тип, ауылдаштар иҫтәре китеп ҡарап тора торғайны.**



Беҙ Нуритдин ҡарттың берҙән-бер улы Фәнис менән бөгөн оҫтахана булып хеҙмәт иткән, ҡарт үҙе һалдырған өйҙә ултырабыҙ. Фәнис атаһының ғүмер буйы нимәләр эшләгәнен һөйләй. Әлбиттә, барыһын да иҫләп бөтә алмай, сөнки ҡарттың эшләмәгән эше юҡ ине бит.

- Атай ҡарт 1980 йылдың апрелендә үлде, мин армияға китергә әҙерләнә инем. Ҡырҡын уҡытҡас, армияға киттем. Ул ваҡытта үтә йәш инем, ҡарт күп эштәрҙе өйрәтергә өлгөрмәне. Малай ғына сағымда атай гармун эшләп бирҙе һәм мине уң яҡ бармаҡ менән уйнарға өйрәтте. Һулаҡай яғы менән уйнарға, уң яҡ менән яҡшы итеп уйнарға өйрәнгәс кенә өйрәтермен, тип киҫәтеп ҡуйҙы. Мин күпмелер ваҡыттан һуң уң яҡ бармаҡ менән яҡшылап уйнарға өйрәндем. Күрше ауылдан бер ағай мине үҙенсә һулаҡай бармаҡтар менән уйнарға өйрәтте. Атай ике ҡул менән дә уйнағанды тыңлап торҙо ла, үҙенең ризаһыҙлығын белдерҙе. "Тыңламаның тәки, уйнауыңдың рәте юҡ", тип һуҡранды. Барыбер үҙенсә уйнарға өйрәтеп ҡуйҙы. Атайҙың бар ҡорамалдарының да үҙ урыны бар ине, нәмәһелер кәрәк булһа, ул шуны тиҙ генә табып ала торғайны. Берәй әйберен яңылыш икенсе урынға һалһам, ул уны оҙаҡ ҡына эҙләй, һуңынан мин әрләнеп ҡуя инем, - тип хәтирәләр төйөнөн тағатты улы.

Фәнистең дә һәр инструменты үҙ урынында, бында булмаған ҡорамал юҡ, уның да эшләмәгән эше юҡ. Ул атаһының бала сағын бигүк белмәй икән, быға асыҡлыҡты Нуритдин ҡарттың аталаш ҡустыһы Ғәбдинур Һырлыбаев индерҙе.

Нуритдин Һырлыбаев Ҡыпсаҡ ауылында 1924 йылда тыуа. Бәләкәй Нуритдин ете йәшендә, 1931 йылда һуҡыр ҡала. Был фажиғә ниндәй шарттарҙа булған икәне билдәһеҙ. Күҙһеҙ ҡалғас, ул үҙе өсөн яңы шарттарҙа йәшәргә өйрәнә башлай. Атаһының ғаиләһе икәү булыу сәбәпле, ул ике өй араһында йөрөп үҫә. Атаһының икенсе ғаиләһе ошо уҡ Ҡыпсаҡта йәшәй. Зөлфәр ҡарттың икенсе ҡатыны 1908 йылғы Камила исемле була. Уларҙың өлкән ҡыҙы Ғәшүрә апай Яңы Мөсәт ауылында донъя көттө, икенсеһе, 1939 йылғы Һатыбал исемле улы, Ҡыпсаҡта йәшәне. Улар икеһе лә үлеп ҡалдылар.

Бөгөнгө көндә Зөлфәр ҡарттың берҙән-бер улы 1942 йылғы Ғәбдинур иҫән, Әбделмәмбәттә йәшәй. Ул атаһын бөтөнләй хәтерләмәй, сөнки ул атаһы һуғышҡа киткәс тыуған. Иң тәүҙә Зөлфәр ҡарт хеҙмәт армияһына алына. Ундағыларҙы ваҡыты-ваҡыты менән комиссия үткәреп торалар. 1942 йылдың йәй башында ул фронтҡа ебәрелер алдынан ялға ҡайтарыла. Кире китмәҫ элек урманға барып, Нуритдин менән икәүләп бер нисә йыл сабата үрергә етерлек йүкә һыҙырып алып ҡайталар. Зөлфәр ҡарт Сталинградты обороналауҙа ҡатнаша, ошо аяуһыҙ бәрелештәрҙә һәләк була.

Һуғыш башланғанда егет ҡорона инә башлаған Нуритдин туҡтауһыҙ халыҡ өсөн сабата үрә. Ул үргән сабаталар Әүжән урыҫтары үргән сабаталарҙан нығыраҡ та, ыҡсымыраҡ та була. Магазинда көнкүреш әйберҙәре бөтөнләй булмағас, ул иҫке әйберҙәр ремонтлай: биҙрә төпләй, уртаға ярылған сәйнүктәрҙе һыу аҡмаҫлыҡ итеп ҡоршай һәм нығыта, йәки уға тотҡа эшләй. Сепарат ремонтлай, игенде он итеп тартыу өсөн ҡул тирмәне әтмәлләй, көйәнтә бөгә, һөйәктән тараҡтар, дебет иләү өсөн ая яһай. Эшләгән хеҙмәте өсөн халыҡ уға ҡорот, эремсек, һөт, ҡатыҡ һ.б. ризыҡ менән түләй. Һуғыш ваҡытында ул ауылдаштарына ошолай итеп ярҙам итә, шул уҡ ваҡытта үҙенә лә ашау яғын хәстәрләй. Аяуһыҙ һуғыш ваҡыты әсе, ауыр тормош менән үтә, аслыҡ-яланғаслыҡ уны ла урап үтмәй. Атай ҙа һуғышта ятып ҡалғас, тормош ауырлаша. Нисек кенә булмаһын, ул алһыҙ-ялһыҙ эшләй: талдан мурҙа үрә, быйма табанлай. Бер ваҡытта ла балыҡ төшмәгән урында мурҙа һалмай, ҡайһы ваҡыт ауылдан 2-3 саҡырым алыҫлыҡҡа балыҡҡа йөрөй. Һуғыш бөткәс, ул да башҡалар менән бер рәттән, "Бөйөк Ватан һуғышында еңгән өсөн" миҙалы менән бүләкләнә.

1950 йыл аҙағында ул Ғәйниә исемле еңгәһенә өйләнә, уларҙың ике улдары тыуа - Әмир менән Әнүәр. Улар икеһе лә күптән түгел үлеп ҡалдылар. Ошо йылдар эсендә Нуритдинде ауыл Советы Белорет ҡалаһындағы һуҡырҙар йәмғиәтенә ебәрә. Унда ул Брайль системаһы буйынса уҡырға өйрәнә. Белорет металлургия комбинатында эшләй. Физик яҡтан көслө кеше булғанлыҡтан, ул ауыр хеҙмәттә була - ҡул менән йыуан ҡорос тростар ишә. Һуҡырҙар араһында иң ҙур эш хаҡы алып эшләй. Байтаҡ аҡса туплай. Белоретта йәшәгәнендә үк ул ауылда бура бурата. Күҙ буйынса икенсе төркөм инвалиды булған Ҡорбанғәлиева Зөләйханы осратып өйләнә.

1956 йылда ауылға ҡатыны менән күсеп ҡайта. Зөлхәмиҙә һеңлеһе кейәүгә сыҡмаҫ элек йәшәгән бәләкәй

***✓ Умарта тотоп, ҡорттарҙы үҙе тәрбиәләп, дадандарҙы үҙе эшләй. Барлыҡ эштәрен дә ул күргәҙмәгә ҡуйырлыҡ итеп башҡара. Эшләгән мебелдәрен ҡарап торғанда күҙһеҙ кеше эшләгән икәнен белеп тә булмаған.***

өйҙә йәшәй башлайҙар. Өйөн эшләтеп бөтөрә. Өйөнөң яҡтауҙарын, рамын, тәҙрә ҡапҡастарын үҙе эшләй. Бик матур веранда төҙөй, рамдарын семәрләп биҙәй. Яңы өйөн эшләп бөтөп, бер малай, бер ҡыҙ тәрбиәләп, тулы ғаилә тормошо менән йәшәй ул.

60-сы йылдар башынан уның алыштырғыһыҙ оҫта тигән даны тарала. Иң беренсе ул йоҙаҡҡа асҡыс, унан һуң ағас йышҡы, фуганок эшләй. Унан һуң сүкеп кенә ҡалайҙан тимер мейес яһап ҡуя, көмөш аҡсаларҙан балдаҡтар эшләй. Балаларға һыҙғыртҡыс, бәкеләр яһай, бер бәкеһен алюмин һаплы итеп, ете төрлө аса менән эшләй. Ау үрә, мылтыҡ ремонтлай. Оҫтарғандан-оҫтара барып, ул диван эшләй башлай, һуңынан асмалы йоморо өҫтәл, шкаф, шифоньер, һауыт-һаба шкафтары, асмалы тәҙрә рамы, ишектәр эшләп һата.

Умарта тотоп, ҡорттарҙы үҙе тәрбиәләп, дадандарҙы үҙе эшләй. Ҡорт айырырын сәғәте-минуты менән алдан белә. Барлыҡ эштәрен дә ул күргәҙмәгә ҡуйырлыҡ итеп башҡара. Эшләгән мебелдәрен ҡарап торғанда күҙһеҙ кеше эшләгән икәнен белеп тә булмаған. Йәйме, ҡышмы, ул Нәби ауылында йәшәгән һеңлеһенә хәл белергә ауылдан туп-тура йәйәүләп барып йөрөгән, улай ғына ла түгел, Тәмәскә лә бер үҙе йәйәүләп сығып әйләнгән. Ҡатыны өйҙә булмағанда икмәкте үҙе бешергән, аш-һыуға оҫта булған. Замок ҡуйып кирза итек тегә, быймаларҙы оҫта табанлай, шуғалыр ҙа халыҡ быймаһын табанлатырға гел уға килтерә. Әүжәнгә барып бойма баҫырға өйрәнеп ҡайта, һатырға түгел, тик үҙе өсөн генә баҫып кейә уларҙы. Мандолина тауышын профессиональ музыкант кеүек көйләй белә. Бармаҡтарының һиҙгер булыуы арҡаһында ҡағыҙ аҡсаны тотоп ҡарап, яңылышмай таный. Ишектән инеп килгән кешене аяҡ тауышынан таный ала.

1960 йылда Ғәбдинур ҡустыһы Яңы Мөсәттән балта һаплар өсөн сағандан бер ағас ярҡа алып ҡайта һәм балтаһын һаплатыр өсөн Нуритдин ағаһына алып килә. Ағаһы ағас киҫәген тотоп ҡына ҡарай ҙа "Был ағасың һөйән бит", ти. Ысынлап та ул һөйәп ҡуйып киптерелгән йыуан ғына йүкә ағасы булып сыға. Байтаҡ йылдар үткәс, Нуритдин ҡарт ошо һөйән киҫәген солярҡаға батырып ҡуйып, унан бик сифатлы фуганок эшләй.

Бесәнгә лә йөрөнө ул. Яҫы тырма менән бесән йыя торғайны. Бакуйҙың өҫтөнән тапап бара, унан төшмәй атлай, бакуй аяҡҡа беләнеп ята бит.

Ғаяз Заһитовҡа тәҙрә рамы эшләргә өйрәтә, унан фуганка менән йыштырып, таҡтаны ҡулы менән һыйпап ҡарап: "Быларың ҡыйыш йышылған, төҙ итеп, урынына еткереп эшлә", - тип бер көн буйы әҙерләгән рам брустарынан тәҙрә рамы эшләтмәй. Һуңынан Ғаяз еҙнә тәҙрә рамы эшләүсе булып китте. Һандыҡтарҙы күп эшләне ул, халыҡта әле лә улар әҙ түгел, яҡын-тирәләге ауылдарҙа ла бар.

Музыкаға һәләтле була. Гармунда, мандолинала, скрипкала уйнаны. Скрипканы ла үҙе эшләне. Үҙе эшләгән скрипкала уйнап, район үҙәгендә бер смотрҙа ҡатнаша һәм беренсе урын ала. Бүләккә уға бойма эләгә. Был еңеүе менән ул Өфө ҡалаһында буласаҡ республика беренселегенә үтә, тик унда бара алмай, сөнки Өфөгә алып йөрөргә кеше табылмай. Был смотр тураһында нисәнсе йылдалыр Дәүләтбай ағай Рәхмәтуллин яҙып сыҡҡайны. Эшләгән скрипкаларының береһе әле Иҫке Монасип ауылында бар тиҙәр. Шулай уҡ уның үткер генә салғынан эшләгән ҡумыҙҙары ла әле райондың ҡайһы бер оҫталарында һаҡлана, тиҙәр.

Ҡунаҡҡа йөрөй торғайны, үҙе лә ҡунаҡ һыйларға әүәҫ булды, таҡмаҡты ҡойоп ҡуя торғайны, тиҙәр. Ғүмере буйы тәмәке тартты. Күҙе булмаған кешегә тәмәке тартыу көн үткәреүгә лә булышлыҡ иткәндер инде.

Үҙе кеше көнлө булһа ла, ул ғүмере буйы кешегә бәлә булып ултырмай, һоҡланғыс оҫталығы менән дан ҡаҙана. "Берәй мебель эшләгәндә ул ике йышылған таҡтаны бергә беркетә икән, уның бер генә миллиметр ҙа ярығы булмай, йөйө лә беленмәй торғайны", ти олораҡ ауылдаштар. Уның эшләгән эштәрен, әлбиттә, һанап бөтөп булмай. Нисек итеп мейес сығарғанын ғына алайыҡ. Күҙе булған кешеләр ҙә булдыра алмаған шөғөл бит был. 1960 йылдарҙа ауылда йәшелсә менән булышҡан ғаиләләр юҡ кимәлендә саҡта, уларҙа йәшелсәнең бар төрө лә емерелеп уңа.

Бына шундай кеше йәшәне беҙҙең ауылда. Күҙе булмаһа ла, ғүмере буйы тик кенә ултырманы. Ул эшләгән эштәрҙе башҡарып сығырға барыһының да хәленән килмәй. Ниндәй генә ауырлыҡтар төшһә лә, яҙмышына буйһонмай йәшәне ул.

**Фәтих СӘЙФЕТДИНОВ.**
**Бөрйән районы.**

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК

## Аурабыҙ тураһында

Аура - ул беҙҙең ағзаларыбыҙ һәм күҙәнәктәребеҙ өсөн энергия сығанағы; күҙ тейеүҙән, боҙомдан, сихырҙан, нәфрәттән һәм башҡа кире йоғонтонан һаҡлаусы ҡалҡан; үҫеш программаһы. Йәғни, аурабыҙ ниндәй, беҙ шундай тип әйтергә була. Тимәк, беҙҙең аурабыҙ ҙур, таҙа, тигеҙ, тығыҙ, сағыу булырға тейеш.

Аура үҙе алты йоҡа тәндән тора:

*1. Эфир тән - ғәмәлдәр тәне;*
*2. Астраль тән - кисерештәр һәм теләктәр тәне;*
*3. Менталь тән - уйҙар тәне;*
*4. Каузаль тән - карма тәне;*
*5. Шәхси "Мин" тәне;*
*6. Абсолют тән.*

Йәмғеһе, физик тән менән бергә беҙҙә ете тән бар.

Кешеләр, хайуандар кеүек үк, aураһы булғанда ғына йәшәй ала. Ул -беҙҙең энергия аккумуляторы. Аура йәшәйеште тәьмин итә. Әгәр ниндәйҙер сәбәп менән тәндең бер өлөшө ауралың тышына сыға икән, унда тартышыу, көҙән йыйырыу башлана.

Ни өсөн наркомандар "ломка" ваҡытында бөгәрләнеп ята? Уларҙың, ҡабул ителгән дозанан һуң, ауралары "ватыла" башлай һәм ҡапыл бәләкәйләнә. Тәндең бер өлөшө ауранан ситтә тороп ҡала һәм унда түҙеп торғоһоҙ ауыртыу барлыҡҡа килә.

Кешенең сәләмәтлеге һәм уның яҙмышы тәүге дүрт нескә тәндең торошона бәйле. Тап ошо тәндәр космоэнергетика сеанстары барышында таҙара ла инде.

Физик тән - эфир тәндең бермә-бер күсермәһе, бары тик яҡтылығы арҡаһында ғына эфир тән ҙурыраҡ булып күренә. Тап ошо күҙгә күренмәҫ энергетик тән, голограмма, физик тән өсөн матрица булып тора, туҡымаларҙың яңырыуы (регенерация) эфир тән шаблоны буйынса бара.

Эфир тәндә нормаға килтерһәк, туҡымаларҙың яңырыуы яңы сәләмәт шаблон буйынса барасаҡ. Физик ағза, әлегә тиклем ниндәй генә торошта булмаһын, нормаға ҡайтасаҡ, был - ҡанун!

Күреүегеҙсә, барыһы ла ябай. Тимәк, теләһә ниндәй ағзаны дауалап була, сөнки теләһә ҡайһы ағзаның эфир тәнен нормаға килтерергә мөмкин. Ғайса бәйғәмбәр тап шулай итеп дауалаған - эфир һәм физик тәнде нормаға килтергән. Эфир тән даими үҙгәреп тора, уны аңлы рәүештә үҙгәртергә лә була.

Космоэнергетика менән дауалаусы үҙенең бер йомшаҡ ҡуллы дуҫына: "Ҡулдарың тимерсенеке кеүек икән тип күҙ алдына килтер, һәм улар көслө булыр", - тип шаярта. Бер нисә айҙан һуң ҡабат осрашып, ҡул бирешкәндә, дауалаусы ауыртыуҙан саҡ ҡысҡырып ебәрмәй - дуҫы уның ҡулын ҡыпһыуыр кеүек ҡыҫып ала. Баҡтиһәң, ул әйткәндәрҙе дөрөҫ тип ҡабул иткән һәм ҡулдарын тимерсенеке кеүек тип күҙ алдына килтергән. Һөҙөмтәлә ҡулдары, ысынлап та, көслөгә әйләнгән. Ә һул ҡулы нисек йомшаҡ булһа, шул килеш ҡалған (ул бары тик уң ҡулын ғына көслө итеп күҙаллаған).

Шулай итеп, ниндәйҙер ағзаны күҙ алдына килтереп, беҙ шундай уҡ эфир ағзаға йоғонто яһайбыҙ һәм уны, йәғни эфир тәнебеҙҙе үҙ аңыбыҙ менән үҙгәртәбеҙ. Бына ни өсөн үҙенде сәләмәт тип күҙалларға кәрәк икән! Ә ҡайһы бер кешеләр сирҙәренә артыҡ иғтибар биреп, аңһыҙ рәүештә уларҙы көсәйтә. Ә бит, киреһенсә, һауыҡтырырға кәрәк.

Һәр ваҡыт үҙегеҙҙе сәләмәт тип күҙаллағыҙ һәм тойоғоҙ.

Космоэнергетика сеанстары ваҡытында илаһи каналдар эфир тәнен гармонияға килтерә, тимәк, физик тән дә нормаға килә. Бик ябай! Артабан астраль һәм башҡа тәндәр тураһында һөйләшербеҙ.

**Рауфан МОРТАЗИН.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Мөхәббәт хисен тәрбиәләүсе Будда медитацияһы

Үҙегеҙҙең тәғәйенләнешегеҙҙе белгәс, уны тормошҡа ашырыу буйынса маҡсатығыҙға эҙмә-эҙлекле барыуығыҙҙы аңларһығыҙ. Алда ниндәй ярҙам көткәнлеген күҙ алдына ла килтерә алмайһығыҙ әле. Һеҙ мөғжизәле тап килеүҙәр менән осрашасаҡһығыҙ. Улар араһында тура юлға сығырға ярҙам итеүсе осраҡлы осрашыуҙар, бәхетле ваҡиғалар буласаҡ. Әммә улар бөтөнләй осраҡлылыҡ, уңыш һәм ябай тап килеү түгел. Һеҙ даими рәүештә Илаһ һәм фәрештәләр һәр саҡ эргәлә, тигән фекергә күнегәсәкһегеҙ, тирә-яҡ мөхиттең әкрен генә шыбырлауында илаһи етәкселек тоясаҡһығыҙ.

Ҡеүәтле һәм йоғонтоло итеп үҙ-үҙеңде көйләү өсөн үткәндәргә ҡайтырға кәрәкмәй. Илаһи аҡылдың яңы бейеклектәренә күтәрерҙәй үҙ һүҙҙәрегеҙҙе ҡулланығыҙ.

*Мин көндәлек мәшәҡәттәр уртаһында ҡайнағанда ла илаһи аҡыл менән гармонияла булам.*

Насармы ни? Тағы ла бындай вариантты файҙаланып ҡарағыҙ:

*Ижади энергия тәнемдең һәм аңымдың һәр күҙәнәгенә үтеп инә, ул мине Ижадсының ниәттәре менән берләштерә.*

Шулай уҡ бик шәп, эйе бит? Ә бындай аффирмация нисек:

*Ошо мәлдә мине тултырған һөйөүең өсөн рәхмәт һиңә, Ижадсы.*

Аффирмацияларҙың нисек булырға тейешлеген аңлайһығыҙ, шундай уҡ рухта дауам итегеҙ.

**Тормошоғоҙҙа нимә дөрөҫ түгел һәм уны нисек төҙәтергә?**

Балтика буйы тылсымсыһы һәм бағымсыһы Бесси тарафынан әйтелгән ошо кәңәштәрҙе ҡулланып ҡарағыҙ:

*Әгәр һеҙ башҡаларҙың кәйефен боҙмайһығыҙ, ә күтәрәһегеҙ икән...*

*Әгәр бөтөн көсөгөҙҙө һалып тирә-яҡтағыларға ярҙам итергә тырышаһығыҙ икән...*

*Әгәр даими рәүештә тәнегеҙҙе көсөргәнештән арындырып, ыңғай фекергә һәм конструктив тәртипкә көйләнәһегеҙ икән...*

*Әгәр көндән-көн оптимисыраҡ була барып, күңелегеҙ һирәк кенә төшә икән...*

*Әгәр стресс сығанағын табып, унан арына алаһығыҙ икән...*

*Әгәр, башҡаларҙы ғәфү итеп, нәфрәтте һөйөүгә әйләндерә алаһығыҙ икән...*

*Әгәр Илаһҡа һәм Юғары Минегеҙгә һөйөү аша үҙегеҙгә ышанаһығыҙ икән...*

*Әгәр аҡса тураһындағы һеҙҙе бәйләп тороусы күҙаллауҙарҙы ҡайтанан программаланығыҙ икән...*

*Әгәр үҙегеҙҙе ғәфү итеп, үҙегеҙгә һөйөү менән ҡарайһығыҙ икән...*

*Әгәр һеҙ аҡса етмәгәнлек проблемаһын хәл итергә булышҡан метафизик күнекмәләрҙе эшләйһегеҙ икән...*

*Әгәр аныҡ һәм дөйөм һөйөүҙе белдереү юлындағы кәртәләрҙән арынғанһығыҙ икән...*

*Әгәр тән телегеҙҙе ҡайтанан программалаштырып, уны ылыҡтырғыс иткәнһегеҙ икән...*

*Әгәр яратҡан кешегеҙ менән яҡыная алдығыҙ икән...*

*Әгәр аңығыҙҙы үҫтереү менән шөғөлләнәһегеҙ икән...*

...Ул ваҡытта тормошоғоҙҙа тиҙҙән күтәрәсәк мәсьәләнән башҡа бер нәмә лә үҙгәртергә кәрәкмәй. Был хаҡта беҙ тиҙҙән һөйләшәсәкбеҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 8 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.40 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Последняя встреча", 13-я серия. Сериал
22.30 "Трудная дочь маршала Тимошенко". Док. фильм
23.30 "Побег", 10-я серия
00.30 "Борджиа", 9-я серия. Сериал
01.20, 03.05 "Залечь на дно в Брюгге".
03.00 Новости
03.15 "Земля мертвых"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 112-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 140-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 217-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Пилот международных авиалиний". Сериал
22.50 "Тайны следствия". "Падение". Сериал
23.50 "Вести+"
00.10 "Ледоруб для Троцкого. Хроника одной мести"
01.10 "Профилактика"
02.25 "Честный детектив"
02.50 "Листья травы"

### НТВ
06.00 "НТВ утром"
08.30 "Кремлевские дети"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Победившие смерть". Док. фильм
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Беглец". Остросюжетный сериал
21.30 "Глухарь. Продолжение". "Пропасть", "Один-три-семь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело Крапивиных". "Скачки с препятствиями". Сериал
00.30 "Футбольная ночь"
01.05 "До суда"
02.05 "Один день. Новая версия"
02.40 "Проклятый рай-2". Сериал
05.30 "Особо опасен!"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Мультфильм"**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляетç"**
